МУНИЦИПАЛЬНОЕ БЮДЖЕТНОЕ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ СРЕДНЯЯ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ ШКОЛА ИМЕНИ ЯКУПА КУЛМЫЯ ДЕРЕВНИ КАНАКАЕВО МУНИЦИПАЛЬНОГО РАЙОНА ИШИМБАЙСКИЙ РАЙОН РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

| Рассмотрено на заседании ШМО учителей начальных классов | Согласовано | Утверждено |
|---|---|---|
| Руководитель ШМО:________ | Заместитель директора по УВР:________ | Директор МБОУ СОШ им. Я.Кулмыя д.Канакаево |
| Фахретдинова З.Ш. | Фахретдинов И.Х. | ________ |
| Протокол №1 от «30 августа 2023 г | «30» августа 2023 г | Акбулатова З.М. |
| | | Приказ № от «31» 08 2023 г |

РАБОЧАЯ ПРОГРАММА
ПО РОДНОМУ БАШКИРСКОМУ ЯЗЫКУ
НАЧАЛЬНОГО ОБЩЕГО ОБРАЗОВАНИЯ

Составлена на основе авторской учебной программы
Ф.Ш.Сынбулатовой, Г. А. Валиевой

Составила учитель начальных классов : Ишмуратова Л.Ф.
2023 год

"Башҡорт теле"буйынса программа "Мәғариф тураһында"ғы законға, "Дөйөм белем биреү йөкмәткеһенең фундаменталь үҙәге" документына, "Рәсәй Федерацияһының икенсе быуын Федераль дәүләт стандарттарына", "Рәсәй Мәғарифын модернизациялау концепцияһы"на,Д.Б.Эльконин – В.В.Давыдов үҫтереүсе уҡытыу системаһына, "Башҡортостан халыҡтары телдәре" законына, "Башҡорт мәғарифын үҫтереү концепцияһы"на, дөйөм белем биреү учреждениеларында ҡулланыу өсөн Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән" Башҡорт теле"нән уҡыу программалары.Дөйөм белем биреү мәктәптәренең башланғыс кластары өсөн программаһына, Ф.Ш. Сынбулатованың "Әсә теле " дәреслектәренә таянып, Башҡортостан Республикаһы Ишембай районы Муниципаль ройоны хакимиәте Ҡанаҡай ауылының Яҡуп Ҡолмой исемендәге урта дөйөм белем биреү муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының икенсе быуын Федераль дәүләт дөйөм белем биреү стандарттарына таянып төҙөлгән уҡытыусының эш программаһына, мәктәп буйынса 27.05.2015 йылдың №88 Бойороғо менән раҫланған положение нигеҙендә төҙөлдө.

1-4 кластарҙа башҡорт теле предметы буйынса белем биреү, һөйләү һәм яҙма телмәр формалаштырыу, укыусыны кеше¬лек сифаттарына эйә булған эшмәкәр шәхес итеп тәрбиәләү, универсаль уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәтеү - программаның төп йүнәлештәре булып тора.

## «Башҡорт теле» предметының уҡыу планындағы сәғәттәр бирелеше

Башланғыс мәктәптәр өсөн базис уҡыу планы яңы стандартты индереү һәм тормошҡа ашырыу буйынса иң әһәмиәтле документтарҙың береһе булып тора.

Был программа дәүләт стандартының федераль компонентына нигеҙләнеп төҙөлдө. Базис уҡыу планына ярашлы, Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү мәктәптәрендә «Башҡорт теле» предметын өйрәнеүгә I класта грамотаға өйрәтеүгә – 90, башҡорт теленә - 23 (33 аҙнанан сығып), II класта бөтәһе 105 сәғәт (аҙнаһына 3-әр сәғәт), III класта бөтәһе 140 сәғәт (аҙнаһына 4-әр сәғәт) , IV класта бөтәһе 105 сәғәт ( аҙнаһына 3 сәғәт)35 аҙнанан сығып бирелә.

*Башҡортостан мәҙәниәте буйынса 1-се класта 10 сәғәт,2-се класта 7 сәғәт, 3-сө класта 3 сәғәт , 4 класта 18 сәғәт башҡорт теле дәрестәренә ҡушылып үткәрелә ,тематик планда курсив хәрефтәр менән күрһәтелә.*

# 1. Башҡорт телен үҙләштереүҙең шәхси, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләре

### Башҡорт телен үҙләштереүҙең шәхси, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләре

Яңы стандарттарға ярашлы уҡыу сифатын өйрәнгәндә, йәғни тикшереү процесында, түбәндәге һөҙөмтәләр күҙаллана:

- шәхси үҫеш кимәле;
- метапредмет кимәле;
- предмет буйынса белем кимәле.

Шәхси үҫеш кимәле. Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттарын тәрбиәләү. Уны үҙ аллы үҫешкә, камиллашыу оҫталығына өйрәтеү, һөҙөмтәлә уҡымышлы, үҙ еренең, иленең, халҡының ҡиммәттәренә төшөнгән, уны һанлаған һәм һаҡлаған, яҡлаған социум итеп формалаштырыуға башланғыс нигеҙ һалыу.

Метапредмет кимәле. Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, ойоштороу һәм коммуникатив эшмәкәрлек, йәғни баланы үҙ аллы уҡырға, белем алырға өйрәтеү.

Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, шәхси, ойоштороу һәм коммуникатив эшмәкәрлек. Шәхси эшмәкәрлек - баланы уҡымышлы һәм аңлы шәхес итеп үҫтереү. Эшмәкәрлекте уның тормош һәм кешелеклелек ҡиммәттәрен, әхлаҡи һәм мораль нормаларҙы аңлап ҡабул итеүен, әйләнә- тирәләге күренештәргә һәм ваҡиғаларға шәхси ҡарашын формалаштырыуға йүнәлтеү.

Ойоштороу эшмәкәрлеге танып белеү процесы менән идара итеүҙе күҙ уңында тота: эшмәкәрлекте күҙаллау, планлаштырыу, башҡарыу, тикшереү, үҙгәрештәр индереү һәм баһалауҙы үҙ эсенә ала.

Танып белеү эшмәкәрлеге тейешле мәғлүмәтте эҙләп табыу һәм анализлауҙы, проблемаларҙы хәл итеү юлдарын эҙләүҙе һәм ҡулланыуҙы тәьмин итә.

Аралашыу эшмәкәрлеге белем алыу процесында арала шырға өйрәнеүҙе ойоштороуға йүнәлтелгән. Ул башҡа кешеләрҙе тыңлай белеү һәм аңлауҙы, мәғлүмәтте теүәл тапшырыуҙы үҙ эсенә ала.

Предмет кимәле. Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны эшкәртеү һәм ҡулланыу әлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.

## Шәхси үҫеш кимәле

## 1 – се класс

«Башҡорт теле» предметын үҙләштергәндә, уҡытыусы шәхси үҫеш кимәлен үҫтереү бурысын ҡуя:

- телдең һәм телмәрҙең кешеләр тормошондағы әһәмиәтен аңлау;
- тексты эмоциональ ҡабул итеү, үҙеңдең хис-тойғоларыңды белдереү;
- кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлау, уртаҡлашыу, бүлешеү;
- уҡылған әҫәрҙәрҙең геройҙарына һәм уларҙың эшенә ҡарата үҙеңдең мөнәсәбәтеңде белдереү.

## Метапредмет кимәле

**Ойоштороу эшмәкәрлеге:**

- уҡытыусы ярҙамында эшмәкәрлек маҡсатын билдәләү;
- дәрестә эш барышын һөйләп барыу;
- дәреслек материалы менән эшләү барышында уйҙы, фаразды әйтеү;
- уҡытыусы тәкдим иткән план буйынса эшләү;
- коллектив төҙөлгән план буйынса эшләү.

**Танып белеү эшмәкәрлеге:**

- дәреслектең, матур яҙыу өлгөләренең айышына төшөнөү (тышы, йөкмәткеһе, шартлы билдәләре);
- дәреслектән, текстан, иллюстрацияларҙан һорауға яуап табыу;
- бергәләп йәки үҙ аллы башҡарған эш буйынса һығымта яһай белеү;
- ҙур булмаған тексттың йөкмәткеһен һөйләү.

Аралашыу эшмәкәрлеге:

- фекереңде телдән формалаштырыу;
- кешенең телмәрен тыңлау һәм аңлау;
- тыңлай белеүҙең уңышлы аралашыуға шарт булыуын үҙләштереү;
- тексты тасуири уҡыу һәм йөкмәткеһен һөйләү;
- уҡытыусы һәм класташтар менән берлектә тәртип ҡағиҙәләре һәм уларҙы үтәү тураһында килешеү.
- тексты һөйләмдәр теҙмәһенән айыра белеү;

- бөтөн һүҙҙәр менән аңлы, дөрөҫ уҡыу;
- тексты ентекле һөйләй белеү;
- хикәйә төҙөү;
- һүҙҙең өндәрен атау, ижеккә бүлеү, өндәр һәм хәрефтәр һанын билдәләү, дөрөҫ баҫым ҡуйыу, хәреф-өн анализы яһау;
- һөйләмде, кешенең исемен һәм фамилияһын баш хәреф менән яҙыу;
- һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙыу;
- баҫма тексты күсереп яҙыу, һүҙҙәрҙе һәм ҙур булмаған һөйләмдәрҙе диктант итеп яҙыу;

**2 класс**

**Шәхси үҫеш кимәле**

-телдең һәм телмәрҙең кешеләр тормошондағы әһәмиәтен аңлау;
-тексты эмоциональ ҡабул итеү, үҙеңдең хис-тойғоларың менән бүлешеү;
-кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлау, уртаҡлашыу, бүлешеү;
-башҡа кешеләрҙең яҙма һәм һөйләү телмәренә иғтибар итеү (интонация, темп, тон, һүҙҙәр һәм тыныш билдәләренең ҡулланылышы һ. б.).

Был һөҙөмтәләргә ирешеүҙең сараһы булып дәреслектәге күнегеүҙәр тора.

**Метапредмет кимәле**

Ойоштороу эшмәкәрдеге:
-уҡытыусы ярҙамында эшмәкәрлек маҡсатын билдәләү;
-планлаштырыу;
-һөҙөмтәне һәм белемде үҙләштереү кимәлен күҙаллау;
-дәрестә эш барышын һөйләп аңлатып барыу;
-дәреслек материалы менән эшләү барышында фекер, фараз менән уртаҡлашыу;
-уҡытыусы тәкдим иткән план буйынса эшләү;
-коллектив төҙөлгән план буйынса эшләү;
-тикшереү;
- төҙәтмәләр индереү;
- баһалау.

**Танып белеү эшмәкәрлеге**:
-дәреслектең, һүҙлектәрҙең, белешмәләрҙең айышына төшөнөү (йөкмәткеһе, шартлы билдәләре);
-дәреслектән, текстан, таблицаларҙан, схемаларҙан, иллюстрацияларҙан һорауға яуап табыу;

-күмәкләп йәки үҙ аллы башҡарған эш буйынса һығымта яһай белеү;
-ҙур булмаған текстың йөкмәткеһен һөйләү;
-бер төрлө информацияны икенсе төрлө формаға үҙгәртеү.

**Аралашыу әшмәкәрлеге**:
-үҙеңдең фекереңде телдән һәм яҙма рәүештә формалаш- тырыу;
-кешенең телмәрен тыңлау һәм аңлау, телмәрҙең темаһын, терәк үҙҙәрен билдәләү;
-тексты тасуири уҡыу һәм йөкмәткеһен һөйләү;
-уҡытыусы һәм класташтар менән берлектә тәртип ҡағиҙәләре һәм уларҙы үтәү, аралашыу тураһында килешеү;
-парлап, төркәмләп эшләргә өйрәнеү, төрлө ролдәр үтәү (башҡарыусы йәки лидер).

**Предмет үҙләштереү кимәле**

-уҡытыусы йәки уҡыусыларҙың һөйләгән тексын ишетеп ҡабул итеү;
-тексты һөйләмдәр теҙмәһенән айыра белеү;
-бөтөн һүҙҙәр менән аңлы, дөрөҫ, тасуири уҡыу;
-текстың исемен (атамаһын) аңлау, тексҡа исем һайлап алыу йәки ҡушыу;
-тексты өлөштәргә бүлеү, һәр бүлеккә исем ҡушыу (план төҙөү);
-ентекле йәки һайланған өлөштөң йөкмәткеһен һөйләү;
- тексты ентекле һөйләй белеү;
-ҡыҫҡа хикәйә төҙөү;
-һүҙҙең өндәрен дөрөҫ атау, һүҙҙе ижеккә бүлеү, өндәр һәм хәрефтәр һанын билдәләү, дөрөҫ баҫым ҡуйыу, баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәрҙе табыу, телдән өн-хәреф анализы яһау;-һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәләрен ҡуйыу;
-баҫма тексты дөрөҫ итеп күсереп яҙыу, яҙылғанды өлгө менән сағыштырып тикшереү;
-һүҙҙәрҙе һәм ҙур булмаған һөйләмдәрҙе, 30-40 һүҙҙән торған тексты диктант итеп яҙыу;
-һүҙҙәрҙең ауыр яҙылышлы урындарын күреү һәм дөрөҫ яҙыу;
-һөйләмде, кешенең исемен һәм фамилияһын, географик атамаларҙы, хайуан ҡушаматтарын баш хәреф менән яҙыу; нәҙеклек (ь) һәм ҡалынлыҡ (ъ) билдәләрен, йә, йө, йү, йе, йо, йы ҡушымсаларын дөрөҫ яҙыу;
- өйрәнелгән ҡағиҙәләргә хаталарҙы табып төҙәтеү;
-тамырҙаш һүҙҙәрҙең тамырын табыу, ялғауҙарҙы айыра белеү һәм билдәләү;
-һүҙҙәргә һорау ҡуйыу; кем? нимә? һорауына яуап биреүсе һүҙҙәрҙе
-күреү, һөйләмдә кем йәки нимә тураһында һүҙ барыуын асыҡлау;
-бирелгән һүҙҙәрҙән йәки тема буйынса һөйләмдәр төҙөү;
-картина йәки бирелгән тема буйынса ҙур булмаған текст төҙөү, уҡытыусы ярҙамында 4-5 һөйләмдән торған тексты дәфтәргә яҙыу.

**3 класс**

**1. Шәхси сифаттарҙы үҫтерергә:**

- үҙ аллы эш итергә, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарарға;
- атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә ҡарата ихтирамлы булырға;
- мәктәп йыһаздарына, уҡыу-әсбаптарына һаҡсыл булырға;
- тыуған илде яратырға; ерҙе, телде һаҡларға;
- һаулыҡты нығытырға;

- ҡунаҡта, кинола йәки экскурсия һәм башҡа йәмәғәт урындарында әҙәпле булырға, файҙалы ял итергә;
- кеше менән аралашыу этикетын үҙләштерергә.

1) **Предмет буйынса белем алырға:**

- һүҙҙең өн моделенә ярашлы һүҙ уйлап табырға;
- һүҙҙең өлөштәрен (тамыр һәм ялғау, яһаусы ялғау һәм яһалма һүҙ) айырырға;
- тамырҙаш һүҙҙәрҙе танырға. Уларҙы башҡа оҡшаш һүҙҙәрҙән айырырға;
- тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәр һәм хәрефтәр, парлы- парһыҙ, яңғырау-һаңғырау, сонор тартынҡы өндәр, сиратлашып килеүсе тартынҡылар тураһында һөйләй белергә;
- һүҙгә фонетик анализ яһай белергә;
- ҡушма һүҙҙәрҙе танырға, уларҙың дөрөҫ яҙылышын аңлата белергә;

- үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе танырға һәм уларға дөрөҫ ялғау ҡуша белергә;
- һүҙ төркөмдәрен (предмет атамаһын, билдәһен, хәрәкәтен белдергән һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙе) таба белергә;
- һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен айыра белергә;
- сюжетлы һүрәт, һорауҙар, терәк һүҙҙәр ярҙамында хикәйә, әкиәт ижад итергә.

2) **Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштерергә:**

- үҙ аллы белем алырға, мәғлүмәт йыйырға һәм уларҙы ҡуллана белергә:
- дәрес барышында уҡытыусы менән берлектә эшләргә; дәрескә маҡсат ҡуйырға һәм уны дәрес һуҙымында күҙ уңында тота белергә һәм тормошҡа ашырырға, эште дөрөҫ планлаштырырға, эҙләнеү эше алып барырға;
- эҙләнеү эше һөҙөмтәләре буйынса презентаци̧я эшләргә;
- тиҫтерҙәре һәм оло кешеләр менән итәғәтле һөйләшергә, кеше менән мөнәсәбәт ҡороу оҫталығын үҙләштерергә;
- эшләгән эштәрен дөрөҫ баһаларға һәм кәрәк икән төҙәтмәләр индерергә.

***4-се класта:***

1. *Шәхси сифаттарҙы үҫтерергә:*

-үҙ аллы эш итергә , белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарарға;
-атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә , уҡыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә ҡарата ихтирамлы булырға;
- мәктәп йыһаздарына, уҡыу-әсбаптарына һаҡсыл булырға;
- Тыуған илде яратырға, ерҙе, телде һаҡларға;
- һаулыҡты нығытырға;
- ҡунаҡта, кинола йәки экскурсияла һәм башҡа йәмәғәт урындарында әҙәпле булырға, файҙалы ял итергә;
- кеше менән аралышыу этикетын үҙләштерергә.

2. *Предмет буйынса белем алырға:*

- һүҙҙең өн моделенә ярашлы һүҙ уйлап табырға;
- һүҙҙең өлөштәрен (тамыр һәм ялғау , яһаусы ялғау һәм яһалма һүҙ) айырырға.
- тамырҙаш һүҙҙәрҙе танырға, уларҙы башҡа оҡшаш һүҙҙәрҙән айырырға;
- тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәр һәм хәрефтәр,парлы-парһыҙ, яңғырау-һаңғырау, сонор тартынҡы өндәр, сиратлашып килеүсе тартынҡылар тураһында һөйләй белергә;
-һүҙгә фонетик анализ яһай белергә;
-ҡушма һүҙҙәрҙе танырға, уларҙың дөрөҫ яҙылышын аңлата белергә;
-үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе танырға һәм уларға дөрөҫ ялғау ҡуша белергә тейеш;
-һүҙ төркөмдәрен (предмет атамаһын, билдәһен, хәрәкәтен белдергән һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙе ) таба белергә ;
-һөйләмдең баш киҫәктәрен айыра белергә;
-сюжетлы һүрәт , һорауҙар, терәк һүҙҙәр ярҙамында хикәйә, әкиәт ижад итергә.

3. *Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштерергә:*

- үҙ аллы белем алырға , мәғлүмәт йыйырға һәм уларҙы ҡуллана белергә;
-дәрес барышында уҡытыусы менән берлектә эшләргә: дәрескә маҡсат ҡуйырға һәм уны дәрес һуҙымында күҙ уңында тота белергә һәм тормошҡа ашырырға, эште дөрөҫ планлаштырырға, эҙләнеү эше алып барырға;
-эҙләнеү эше һөҙөмтәләре буйынса презентация эшләргә;
-тиҫтерҙәре һәм оло кешеләр менән итәғәтле һөйләшергә, кеше менән мөнәсәбәт ҡороу оҫталығын үҙләштерергә;
-эшләгән эштәрен дөрөҫ баһаларға һәм кәрәк икән төҙәтмәләр индерергә.

*Көйләүсе универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:*

- Тыуған илгә, уның теленә, мәҙәниәтенә, тарихына һөйөү һәм хөрмәт;
- төрлө ситуацияларҙа йәштәштәре һәм ололар менән хеҙмәттәшлек күнекмәһе, конфликтлы һәм бәхәсле ситуацияларҙан сығыу юлын белеү;- толерантлыҡ;
- башҡа кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлай һәм билдәләй белеү, уртаҡлаша алыу;
- матурлыҡ тойғоһо – тәбиғәт матурлығын күрә белеү, йәнле тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш үҙеңдең һәм әйләнә-тирәңдәге кешеләрҙең ҡылыҡтарына дөрөҫ баһа биреү;
- мораль тәртип ҡағиҙәләрен көйләүсеэтик тойғолар – намыҫлана, ояла белеү, ғәйебеңде танып ғәфү үтенеү.

*Танып-белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:*

- телмәр ситуацияһына ярашлы үҙеңдең фекереңде телдән әйтеү;
- төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте таба белеү (тотош текст, иллюстрация, схема, таблица);
-мәғлүмәтте бер форманан икенсе формаға үҙгәртә белеү (план, схема, таблица төҙөү);
-һүҙлектәр, белешмә материал менән менән файҙалана белеү;
-анализлай һәм синтезлай белеү;
-сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен урынлаштыра белеү;
-фекерләй белеү;

*Коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:*

- һөйләү һәм яҙма формала яуап бирә белеү;
-телмәр сараларын төрлө коммуникатив мәсьәләләрҙе сисеүҙә дөрөҫ ҡулланыу;
- телмәрҙең диалогик һәм монологик формаларын яҡшы белеү;
-үҙеңдең фекереңде нигеҙләй белеү һәм дөрөҫ итеп башҡаларға еткерә алыу;
-башҡаларҙы ла ишетә һәм тыңлай белеү, уларҙың ҡараштарын аңларға тырышыу, кәрәк булғанда үҙеңдең ҡарашыңды төҙәтә белеү;
-дөйөм эшмәкәрлек барышында ҡарар ҡабул итә белеү;
-һораҙар бирә белеү.

***4-се класта:***

• өйрәнелгән орфограммаларҙы эсенә алған 60 — 70 һүҙҙән торған тексты грамоталы яҙа белергә;
• һүҙҙе яһалышы һәм һүҙ төркөмдәре буйынса тикшерә белергә (исемдең һанын, килешен, эйәлек затын; ҡылымдың һанын, заманын һәм затын; сифаттың дәрәжәһен атай белергә);
• 70 — 80 һүҙлек текст буйынса өйрәнеү изложениеһы; тирә-яҡтағы объекттарҙы һүрәтләп, тәбиғәт күренештәрен, хәл-ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле бәйән итеп, хикәйә (текст) төҙөп яҙа белергә;
• мәҙәниәтле аралашыу оҫталығына, телмәр этикетына эйә булырға; аралашҡанда урынлы ваҡытта ғәфү үтенә, рәхмәт әйтә белергә;
• үҙенден фекеренде яҡлағанда, уй-тойғоларынды еткергәндә телмәренде аныҡ, эҙмә-эҙлекле бәйән итеп, тыныс, итәғәтле итеп еткерә белергә; әңгәмәсенең уй-тойғоларын аңлай, уның фекере менән иҫәпләшә һәм уртаҡ фекергә килә белергә тейеш.

# 2. «Башҡорт теле» уҡыу предметының йөкмәткеһе

## 1-се класс

### Грамотаға өйрәтеү

### Әлифба

I. Графика. Өн һәм хәреф. Үпкәнән килә торған һауа ағымының кәртәгә осрауы һәм осрамауына ҡарап, өндәрҙең һуҙынҡыларға һәм тартынҡыларға бүленеше. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Парлы һәм парһыҙ, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Ҡ, к, п өндәренең ғ, г, б өндәре менән сиратла- шыуы. Һүҙҙә нисә өн һәм нисә хәреф барлығын билдәләү. Өн һәм хәрефтең бер-береһенә тура килмәгән осраҡтарын билдәләү һәм күрһәтеү. Һүҙҙәрҙе ижекә бүлеү. Баҫым. Алфавиттағы хәрефтәр тәртибе.

II. һүҙ. Балаларға таныш предметтарҙы: уйынсыҡтар, уҡыу кәрәк-яраҡтары, өҫ-баш кейемдәре, йәнлектәр, үҫемлек һ. б. дөйөм исем аҫтында туплатыу. Һүҙҙәрҙе, мәғәнәләренә ҡарап, кем? нимә? ни эшләй? ниндәй? һорауҙары буйынса төркөмләү, уларҙы һөйләмдән табып, һорау ҡуйыу, телмәрҙә ҡулланыу.

III. Һөйләм. Телмәрҙән һөйләмде айырып алыу. Бирелгән һүҙҙәр менән, картиналар һәм һүрәттәр буйынса һөйләмдәр
төҙөү. Һөйләмдең беренсе һүҙен баш хәреф менән яҙыу. Һөйләм аҙағында нөктә (йыл аҙағында - һорау һәм өндәү) билдәләре ҡуйыу.

Шиғыр, хикәйә, йыр, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ кеүек жанрҙарҙы айырыу.

### Әлифбаға тиклем осор (25 сәғәт)

1. Предмет. Тирә-йүндәге предметтарҙы өйрәнеү. Улар тураһында түбәндәге алгоритм буйынса һөйләү:
- предметтың исеме (аталышы);
- предметтың формаһы (йомро, түңәрәк, оҙонса, шаҡмаҡ, квадрат, тура дүртмөйөш, өсмөйөш, ялпаҡ һ. б.);
- предметтың тышҡы торошо (шыма, ҡытыршы, йомшаҡ, ҡаты һ. б.);
- предметтың төҫө;
- предмет нимәнән эшләнгәнен билдәләү;
- предметтың тормошта ҡулланылышы.

Предметты өйрәнеү, күҙәтеү. Уны башҡа объект менән сағыш-тырыу, уға окшаш объекттар табыу. Уларға хае оҡшаш һыҙаттарҙы билдәләү. Объекттың төп, үҙәк үҙенсәлектәрен табыу, билдәләү. Уларҙы ваҡ, төп булмаған үҙенсәлектәрҙән айыра белеү. Предмет һәм уға ҡағылышлы күренеш буйынса үҙ фекеренде белдереү.
Предметты өйрәнеү ысулдарын табыу, билдәләү һәм һығымта яһау (предметты өйрәнеү ысулы — уны ҡулдар менән тотоп ҡарау, күҙҙәр менән күреү). Фекерләү, аң-зиһен формалаштырыу ысулдарын (күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау, баһалау, йомғаҡлау) үҙләштереү.

2. Һүҙ тураһында төшөнсә.

а) Һүҙ. һүҙҙең исем атау функцияһы. Уның телмәрҙәге әһәмиәте. Һүҙҙең әйтелешен тыңларға һәм ишетергә өйрәнеү, уны күҙәтеү. Һығымта: һүҙҙе әйтәбеҙ һәм ишетәбеҙ.

б) Предметтың исемен белдергән һүҙҙәр. Предмет-һүҙҙәр. Уларҙы символик тамғалау. Предмет-һүҙҙәр йыйыу. һүҙ төркөмө.

Сюжетлы һүрәт. «Мажаралы футбол». «Спорт» темаһына ҡағылышлы предмет-һүҙҙәр туплау. Ул һүҙҙәрҙе ҡулланып, һүрәт буйынса һөйләшеү ҡороу, уларҙы баланың лексиконына индереү. һүрәттәге сюжетҡа оҡшаш ситуацияларҙа юмор, шаяртыу эле-

менттарын ҡулланыу; сетерекле, көтөлмәгән хәл-ваҡиғаларҙан сығыу юлдарын таба белергә өйрәтеү. Һаулыҡ һаҡлау, спортка ылыҡтырыу мәсьәләләренә әһәмиәт биреү.
в) Предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр. Хәрәкәт-һүҙҙәр. Уларҙы символик тамғалау. Һүҙбәйләнеш (предмет-һүҙ + хәрәкәт-һүҙ: *укыусы яҙа, бала уйнай, ямғыр һибәләй* һ. б.). Сюжетлы һүрәт менән эш. «Хәрәкәттә бәрәкәт». Балаға һәр кем үҙенсә матур булыуын күрһәтеү. Үҙ-үҙеңде яратырға, тышҡы ҡиәфәтең, һаулығың тураһында ҡайғыртып йәшәргә кәрәклеген аңғартыу. Хәрәкәт организм өсөн файҙалы икәнен төшөндөрөү.
г) Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. Биддә-һүҙҙәр. Уларҙы символик тамғалау. һүҙбәйләнеш (билдә-һүҙ + предмет-һүҙ: *матур һүрәт, һипкелле кыҙ, уңған әсәй, япраклы ағас;* билдә-һүҙ + хәрәкәт-һүҙ: *яй йүгерә, ҡапыл ырғыны, матур яҙа, шәп укый, күп һөйләй, насар күрә* һ. б.).
Сюжетлы һүрәт менән эш. «Көҙгө урманда». Көҙгө урманды һүрәтләп һөйләгәндә билдә-һүҙҙәрҙе ҡулланып һөйләү. һөйләм һыҙмаһына ярашлы көҙ тураһында телдән инша төҙөү (2—3, 3—4 һөйләм).
Тикшереү эше. Балаларҙың һүҙ төркөмдәрен нисек үҙләштереүҙәрен күҙаллау. Предмет-һүҙҙәр, хәрәкәт-һүҙҙәр, билдә-һүҙҙәр әйтеп, һүҙ схемаларын төшөртөү (ҡалаҡ, сынаяҡ, айыу, ҡуян, сейә, алма, саған, уҫаҡ; тора, бешерә, иләй, түгә, бара, илай, һанай; тоҙло, еүеш, һыуыҡ, һөйкөмлө, егәрле һ. б.; малай бейей, апай һөйләй, ел иҫә, ҡыҙыл сәскә, йомшаҡ ҡул, сәнскеле үлән, һимеҙ һарыҡ, ҡурҡаҡ ҡуян, ҡысҡырып һөйләй, аҙ яҙған, матур кейенгән һ. б.).

3. һөйләм.
һөйләм тураһында төшөнсә. һөйләмдең һыҙмаһы. һөйләмдең башы. һөйләмдең аҙағында тыныш билдәләре (нөктә, һорау,
өндәү).
Бәләкәс һәм ҙур һөйләмдәр. *(Көҙ килде. Матур көҙ килде.)* һөйләмде киңәйтеү, тулыландырыу. һөйләмгә һүҙ өҫтәү тамғаһы.
Сюжетлы һүрәт. «Ҡоштар менән хушлашыу». Көҙгө күренештәргә иғтибарлы булырға, ҡоштар тормошо, көҙөн тыуған яҡтары менән хушлашыу күренештәрен күҙәтергә күнегеү һәм күргән-белгәндәргә таянып һөйләү, тәбиғәт матурлығы аша баланың эске психик торошон ыңғай яҡҡа көйләргә, унан көс-энергия алырға өйрәтеү.
4. Ярҙамсы һүҙҙәр.
а) *Һәм, менән* ярҙамсы һүҙҙәре. Улар менән һөйләмдәр төҙөү.
б) *Да-дә, та-тә, ҙа-ҙә, ла-лә* ярҙамсы һүҙҙәре. Уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе һөйләм һыҙмаһында тамғалау.
в) *Ғына-генә, ҡына-кенә* ярҙамсы һүҙҙәре. Уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе һөйләм һыҙмаһында тамғалау.
Сюжетлы һүрәт. «Бесәй менән булған мажара». Бесәй менән булған мажараларҙы эҙмә-эҙлекле итеп тасуирлап һөйләргә; мәрәкәле, ҡыҙыҡ күренешкә юмор, шаярыу менән ҡарарға күнегеү, кешенең һиңә ҡарата әйтелгән шаяртыу һүҙҙәрен аңлай белеү.
Тикшереү эше. һөйләмде тыңлау, ишетеү һәләтен һәм һыҙма ярҙамында күрһәтеү күнекмәләренең кимәлен күҙаллау. һөйләм әйтеү һәм уның һыҙмаһын һыҙҙырыу. *(Әсмә сәсен үрә. Әсмәнең күлдәге матур ғына. Ул сәсен тарай ҙа тарай.)*
5. Һүҙ һәм өн.

а) Өн тураһында төшөнсә. һүҙҙе тыңлау. һыҙма ярҙамында һүҙҙә һәр өндөң урынын билдәләү - һүҙҙең өн моделей төҙөү. Өн модель буйынса һүҙҙе укыу. Һүҙҙең өн моделенә ярашлы һүҙҙәр уйлау, уны моделгә урынлаштырып ҡысҡырып укыу.
Сюжетлы һүрәт. «Йәшенмәк уйнағанда». Телмәр үҫтереү. Уйнағанда һанашмаҡтар ҡулланыу.
б) Өндәрҙе тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәргә айырыу. Өндәрҙе күҙәтеү, тикшеренеү эше үткәреү һәм уларҙы айырыу ысулдарын, юлдарын билдәләү. Балалар тарафынан асыласаҡ ысулдар: өндө ҡысҡырып әйтеп тыңлау һәм өн әйтелгән мәлдә ҡаршылыҡ осрау-осрамауын тойомлау. Өндө әйткәндә ауыҙ ҡыуышлығынан өрөл-гән һауаға ҡаршылыҡ ҡуйылыу осраҡтарын күҙәтеү: ирендәр ҡымтыла, тел аңҡауға йәбешә, аҫҡы һәм өҫкө рәт тештәр тоташа. Шулай итеп үпкәнән өрөлгән һауаға ҡаршылыҡ тыуа. Тимәк, әйтелгән өн тартынҡы, уны һуҙып әйтеп булмай. Өндө әйткәндә үпкәнән өрөлгән һауа ҡаршылыҡҡа осрамай иркен сыҡһа, өн— һуҙынҡы.
Тартынҡы, һуҙынҡы өндәрҙе айырып тамғалау (тартынҡы — шаҡмаҡ, һуҙынҡы — түңәрәк).
Ижек. Һүҙҙе ижеккә бүлеү. һүҙҙе ижеккә бүлгәндә эш итеү ысулдарын асыу (ритмлап ҡул сабыу, ҡәләм менән партаға һуғыу, аяҡ тибеү, эйәккә ҡул һыртын ҡуйып тойомлау һ. б.), һүҙҙең өн моделендә уны символик рәүештә ижеккә бүлеү. һүрәт менән эш. Телмәр үҫтереү. «Ҡымыҙ — файҙалы эсемлек». Ата-бабаларҙың кәсеп-һөнәрҙәре менән танышыу, өйрәнеү.
Баҫым. Баҫым һүҙҙең аҙаҡҡы ижегенә төшә. Башҡорт телмәре музыкаль һәм яғымлы. Телмәр үҫтереү. «Өйөрҙә бер күк ҡолон, ҡойроғо — бөҙрә толом». Һүрәтләү саралары (сағыштырыу): *мороно ебәк бәрхәт, күҙҙәре янар йондоҙ, ҡойроғо бөҙрә толом, тояҡтары нескә талдай, ҡолаҡтары ҡайсы төҫлө* һ. б.
в) Нәҙек һәм калын өндәр.
Ҡалын һәм нәҙек әйтелешле һүҙҙәрҙе күҙәтеү, сағыштырыу, һығымта яһау. Саф башҡорт һүҙенең беренсе ижеге нәҙек әйтелешле булһа, ҡалған ижектәре лә нәҙек әйтелешле. Саф башҡорт һүҙенең тәүге ижеге ҡалын булһа, ҡалған ижектәре лә ҡалын. Ҡалын, нәҙек өндәрҙе айырып тамғалау (ҡалын өндәр — зәңгәр, нәҙек өндәр - һары төҫтә). һүҙҙәрҙе өн моделе буйынса укыу.
г) Һаңғырау һәм яңғырау тартынҡылар.
Пар тартынҡылы һүҙҙәрҙе күҙәтеү, сағыштырыу. Шау (һаңғырау) йәки тауыш (яңғырау) ярҙамында яһалған өндәр. һаңғырау һәм яңғырау тартынҡыларҙы тамғалау.

**Әлифба осоро ( 65 сәғәт)**

Хәреф — өндөң тамғаһы. Алфавит (1с.)
Бик борон яҙма телмәр булмағанда кешеләр нисек аралашҡан? Алфавиттың хәрефтәрен өйрәнеү кәрәкме? Ни өсөн?
[ә] өнөн тамғалау. Әә хәрефе. Әә хәрефен яҙыу. һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишек-ле» укыу): *шәм, тәм, ләм, мәл, һәм, кәм, сәй, әсәй, әтәс, Әнәс, Әсмә, әрем, кәмә, кәзә, бәлә.*
Телмәр үҫтереү. «Күл буйында».
[а] өнөн тамғалау. Аа хәрефе. Аа хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу(«тишекле» уҡыу): *ал, ат, аш, ас, аҡ, ай,*

*ала, ата, аша, аса, аға, баш, таш, ҡаш, ҡар, май, бай, шар, зар, тар, атай, ағай, апай, ашай, арый, арыш, алҡа, арпа, алма, арҡа, бара, бала, тала, Нала, ҡала.*
[ө] өнөн тамғалау. Өө хәрефе. Өө хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙен моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *өс, өт, өй, өн, өр, һөй, йөй, сөй, көй, көн, төн, өкө, бөрө, көлтә, төйөн, бөйөк, төлкө, бөркөт, һөлөк.*
[о] өнөн тамғалау. Оо хәрефе. Оо хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» укыу): *он, ос, оло, ошо, оро, ҡош, тоҙ, боз, ҡор, тор, ойоҡ, осоҡ, отош, ҡоро, һоро, орсоҡ, борон, болон, ҡором, ҡорот, толом, морон, солон, ҡозоҡ.* Һуҙынҡылар таблицаһын төҙөү.
[ү] өнөн тамғалау. Үү хәрефе. Үү хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» уҡыу): *үр, үт, үҫ, үрә, үтә, үҫә, бүл, күл, сүл, күс, үлән, һүз, үгеҙ, үтек, бүре, бүләк, күнәк, йүләр, йүтәл, гүзәл.* Телмәр үҫтереү. «Себештәрем, бәпестәрем». [у] өнөн тамғалау. Уу хәрефе. Уу хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» уҡыу): *уй, уҡ, ун, ур, ул, ут, ус, ура, ута, ҙур, ҡура, тура, бура, Урал, уҫал, уҫаҡ, ураҡ, усаҡ, утын, упҡын, урғыс, урман, уңған, уртаҡ.*
[л] өнөн тамғалау. Лл хәрефе. Лл хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: *ал, ул, ала, оло, ләлә; Ләлә ал — ала.* һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» укыу): *ал, ул, ил, ала, илэ, оло, пул, тул, бил, кул, Ләлә, алты, алка,иләк, улән, олон, өлөш, илек.*
*[м]* өнөн тамғалау. Мм хәрефе. Мм хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: *мал, мул, мәл, ләм; Ул алма ала.* Һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *мал, мәл, мул, ләм, өмә, алма, Милә, миләш, Морат.*
Тартынҡылар таблицаһын төҙөй башлау. [т] өнөн тамғалау. Тт хәрефе. Тт хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: *таш, тул, тиш, ата, ута, утә, отам, тота; Милә, тутәл ута).* һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» уҡыу): *ат, ут, ит, от, өт, ут, тал, тәм, тут, тот, тир, таш, туш, төш, ата, ута, өтә, утә, тора, тара, таба, тала, тирә, тугә, тубә, тибә, тота, төшә, тишә, тана, торба, торна, төлкө, тирмә, тишек, төтөн, тирәк, тутәл.* Телмәр үҫтереү. «Төлкө менән торна» әкиәте.
[ш] өнөн тамғалау. Шш хәрефе. Шш хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: *шәл, шул, ошо, таш, төш, тишә, тушә; Урал, аш аша.* Һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» уҡыу): *шат, шар, шәл, шәп, шом, таш, ҡаш, баш, биш, туш, буш, ҡуш, йәш, ошо, аша, шама, шыма, тишә, шешә, бешә, тушә, таша, төшә.*
[б] өнөн тамғалау. Бб хәрефе. Бб хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: *бал, убә, бил, бөтә, бәлә, бала; Булат бал ала.* һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» уҡыу): *баш, бал, бил, боҫ, баз, бит, биш, бала, бәлә, булә, була, бура, бөрө, баҡа, башҡа, батша, балта, болот, болон, болан, буран, бишек, бесәй, Булат, Банат, Бикә, Борай, Баймаҡ.*
Телмәр үҫтереү. «Бал».
[р] өнөн тамғалау. Рр хәрефе. Рр хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләм яҙыу: *ур, ир, өр, ара, ура, рәт, урт, тура, төрә; Турат арба тарта.* һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып укыу («тишекле» уҡыу): *ур, ур, өр, урә, ура, бэр, бар, бөр, бор, бур, бара, бора, бөрә, бура, урам, урәм, ураҡ, арыш, арык, арпа, арҡа, тара, төрә, тура, турә, Урал.*

Телмәр үҫтереү. «Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡарыр».
[и] өнөн тамғалау. Ии хәрефе. Ии хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: *ил, иш, биш, тишә, бирә, тирмә, шишмә; Рәшит ат ашата. Эмир тутәл у тар.* һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *ирек, ишәк, имән, иләк, ирен, иген, итек, исем, тирәк, кишер, тишек, шишмә, Илһам, Илнур, Илузә.*
Телмәр үҫтереү. «Икмәк бөтә нәмәгә баш».
[н] өнөн тамғалау. Нн хәрефе. Нн хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: *ун, ин, өн, он, инә, ана, нур, төн, тин, мин; Нөгөш матур. Имән матур була.* һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *нисә, ниңә, нимә, банан, менән, Нәркәс, Нәғим, Нәбир, Нәсих.*
[ң] өнөн тамғалау. ң хәрефе. ң хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: *аң, уң, иң, өң, таң, тиң, туң, шаң, моң, моңло; Был буре өңө. Булмәләмоң тарала.* һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *моңаана, аңлы, миңае, тиңдәш, мөңрәй.*
[с] өнөн тамғалау. Сс хәрефе. Сс хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: *асам, сисә, сурә, сөсө, Сура, Сәлим, Солтан; Сабир ситән урә. Әсмә сәләм бирә. Сура улән сәсә.* һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *сәскә, сәсәк, сукеш, саған, сабаҡ, сыбар, суҡыш, асыш, Сәғит, Сәрмән, Сәфәр.*
Тел мәр үҫтереү. «Сыбар тауыҡ» әкиәте.
[э] өнөн тамғалау. Ээ(е) хәрефе. Ээ(е) хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: *эсә, эре, энә, элә, эшсе, эңер, тел, бел, бер, сер, белем; Эт өрә. Себеш үлән тарта. Эңер иртә төшә.* һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *эҫе, эйә, эйәр, эйәк, эсәк, кеше, серек, бесәй, кесе.*
[ы] өнөн тамғалау. Ыы хәрефе. Ыы хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу: *ысын, арыш, алыш, урын, мышы, тырыш; Сыртлан тырыш бала,* һүҙҙең моделей төҙөү һәм өйрәнелгән хәрефте һүҙ моделенә ҡуйып уҡыу («тишекле» уҡыу): *ҡыш, йыр, ышыҡ, ысыҡ, ҡыҙыл, ҡыҙыҡ, быйыл, муйыл, быйма.*
Телмәр үҫтереү. «Бал ҡорттары».
[з] өнөн тамғалау. Зз хәрефе. Зз хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Парлы яңғырау-һаңғырау тартынҡылар [з] - [с].
Телмәр үҫтереү. «Ике кәзә» әкиәте.^
[й] өнөн тамғалау. Йй хәрефе. Йй хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү. *Йә, йө, йү* ҡушымсалары менән нәҙек һүҙҙәр төҙөү: *йәй, йәйә, бейә, сейә, йәмле, йәшел, йөрөй, мөйөш, йүтәл, йүнсел. Йо, йы* ҡушымсалары менән ҡалын һүҙҙәр төҙөү: *йомро, йыр, йыл. Йе* ҡушымсаһы һүҙ уртаһында һәм һүҙ аҙағында: *тейеш, тейен, бейе, мейе, әсәйем, өләсәйем, бесәйем, инәйем.*
[г] өнөн тамғалау. Гг хәрефе. Гг хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
[к] өнөн тамғалау. Кк хәрефе. Кк хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү. Парлы яңғырау-һаңғырау тартынҡылар [г] - [к].
[ҡ] өнөн тамғалау. Ҡҡ хәрефе. Ҡҡ хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
Телмәр үҫтереү. «Нисәү минең бәпесем?»
[ғ] өнөн тамғалау. Ғғ хәрефе. Ғғ хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү. Парлы яңғырау-һаңғырау тартынҡылар [г] - [ҡ].
Телмәр үҫтереү. «Катоктағы мажара».

[ҙ] өнөн тамғалау. Ҙҙ хәрефе. Ҙҙ хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
[ҫ] өнөн тамғалау. ҫ хәрефе. ҫ хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү. Парлы яңғырау-һаңғырау тартынҡылар [ҙ] - [ҫ].
Телмәр үҫтереү. «Ҡомһоҙ эт» әкиәте.
[һ] өнөн тамғалау. һһ хәрефе. һһ хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
Телмәр үҫтереү. «һаумыһығыҙ!» тип өндәшәм һәр кешегә».
[х] өнөн тамғалау. Хх хәрефе. Хх хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
Телмәр үҫтереү. «Эш һөймәгән көн итмәҫ».
[йа] өндәрен тамғалау. Һүҙҙә й һәм а хәрефтәренең бер ваҡытта ла йәнәш яҙылмауы. [й] һәм [а] өндәре, йәғни [йа] өндәре ишетелгән ерҙә я хәрефе яҙылыуы. Яя хәрефе — ике өндө белдергән хәреф. Яя хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
Телмәр үҫтереү. «Яҡшы һүҙ — йән аҙығы».
[йэ] өндәрен тамғалау. һүҙҙә й һәм э хәрефтәренең бер ваҡытта ла йәнәш яҙылмауы. [й] һәм [э] өндәре, йәғни [йэ] өндәре ишетелгән ерҙә е хәрефе яҙылыуы. Ее хәрефе - ике өндө белдергән хәреф. Ее хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
Телмәр үҫтереү. «Кешенең матур сифаттары».
[йу] өндәрен тамғалау. Һүҙҙә й һәм у хәрефтәренең бер ваҡытта ла йәнәш яҙылмауы. [й] һәм [у] өндәре, йәғни [йу] өндәре ишетелгән ерҙә ю хәрефе яҙылыуы. Юю хәрефе — ике өндө белдергән хәреф. Юю хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
Телмәр үҫтереү. «Йылҡы малы».
[у], [ү] өндәрен тамғалау. һүҙҙең уртаһында, аҙағында у, ү хәрефтәренең яҙылыуы *(тау, шау, тәү, белеу, тауыҡ, еүеш* һ. б.), һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
Телмәр үҫтереү. «Йәйләүҙә».
[п] өнөн тамғалау. Пп хәрефе. Пп хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
Телмәр үҫтереү. «Терпе» әкиәте.
[д] өнөн тамғалау. Дд хәрефе. Дд хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
Телмәр үҫтереү. «Тапҡыр ҡомаҡтар».
[ж] өнөн тамғалау. Жж хәрефе. Жж хәрефен яҙып өйрәнеү. Һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
Телмәр үҫтереү. «Ҡарға менән ҡыҫала».
[в], [у], [ү] өндәрен тамғалау. Вв хәрефе. Вв хәрефен яҙып өйрәнеү. [үәғәҙә], [уаҡыт] тип әйтәбеҙ, «вәғәҙә», «ваҡыт» тип яҙабыҙ. Вв хәрефе рус теленән ингән һүҙҙәрҙә: *ваза, вагон, вокзал, Волга, вышка, диван, велосипед,* һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
[ф] өнөн тамғалау. Фф хәрефе. Фф хәрефен яҙып өйрәнеү. һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
Телмәр үҫтереү. «Бесәй ҙә балыҡ тота».

Нәҙеклек (ь) һәм ҡалын (ъ) айырыу билдәләре. Һүҙҙә ья, ъя тамғалары. Рус теленән һәм башҡа сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә нәҙеклек билдәһе (ь): *альбом, бинокль, лагерь, мебель, нефть, коньки, пальто, фасоль, фонарь, февраль, апрель, июнь, июль, сентябрь, октябрь, ноябрь, декабрь.*
Телмәр үҫтереү. «Буранлы ҡыш».
[ц] өнөн тамғалау. [ц] өнө һәр саҡ ҡалын әйтелешле. Цц хәрефе. Цц хәрефе сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә: *цирк, цифр, цинк, циркуль, концерт, мотоцикл,* һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
Телмәр үҫтереү. «Циркта».
[щ'] өнөн тамғалау. [щ'] өнө һәр саҡ йомшаҡ әйтелешле. Щщ хәрефен яҙып өйрәнеү. Башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә щ хәрефе: *щи, борщ, плащ, щётка,* һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
[ч'] өнөн тамғалау. [ч'] өнө һәр саҡ нәҙек әйтелешле. Чч хәрефен яҙып өйрәнеү. Чч хәрефе һүҙҙәрҙә: *чабан, врач, Чапаев, Учалы.* Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
[й'о] өндәрен тамғалау. [й'] һәм [о], йәғни [й'о] өндәре ишетелгән ерҙә ё хәрефе яҙылыуы. *ёлка.* Её хәрефе — ике өндө белдергән хәреф. ё — рус һүҙҙәрендә тартынҡыны йомшаҡ итеп әйттереүсе тамға: *[шахт'ор], [л'отч'ик], [л'ифт'ор], [лар'ок].* Её хәрефен яҙып өйрәнеү. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға өйрәтеү.
Алфавит. Алфавит хәрефтәренең әйтелеше: Аа [а], Бб [бы], Вв [вы], Гг [гы], Ғғ [ғы], Дд [ды], Ҙҙ [ҙы], Ее [йе], Её [й'о], Жж [жы], Зз [зы], Ии [и], Йй [йы], Кк [кы], Ҡҡ [ҡы], Лл [лы], Мм [мы], Нн [ны], ң [ңы], Оо [о], Өө [ө], Пп [пы], Рр [ры], Сс [сы], ҫ [ҫы], Тт [ты], Уу [у], Үү [ү], Фф [фы], Хх [хы], һһ [һы], Цц [це], Чч [че], Шш [шы], Щщ [ща], ъ (ҡалын айырыу билдәһе), Ыы [ы], ь (нәҙеклек билдәһе, нәҙек айырыу билдәһе), Ээ [э], Әә [ә], Юю [йу], Яя [йа].
Алфавиттың ҡулланылышы: кластағы уҡыусыларҙың фами-лиялары исемлеген алфавит буйынса төҙөү, китапхана кәштәлә-ренә китаптарҙы яҙыусыларҙың фамилияларын алфавит тәртибенә яраҡлаштырып ҡуйыу, һүҙлек һүҙҙәренең алфавит буйынса урынлаштырылыуы.
Грамотаға өйрәнеү осоронда 6 тикшереү эше үткәрелә

**Башҡорт теле ( 23 сәғәт)**

I. Фонетика. Әлифба осоронда «Өн һәм хәреф» темаһы буйынса алған белемдәрҙе системаға килтереү. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Нәҙек һәм ҡалын һүҙҙәр. Уларҙы тамғалау. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Ижек. Һүҙҙе ижеккә бүлеү. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү.

Һүҙ башында э хәрефе. Һүҙ уртаһында е хәрефе. Й хәрефенең яҙылышы. Йо, йө, йе, йү, йы, йә ҡушымсалары. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә е, ё, ю, я хәреф-тамғалары. У-ү хәрефле һүҙҙәр.

II. һүҙ. Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр. Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. Предметтың хәрәкәтен (эшен) белдергән һүҙҙәр. *Һәм, менән, да-дә, ҙа-ҙә, ла-лә, та-тэ, ғына- генә, -ҡына-кенә* ярҙамсы һүҙҙәре.

Һөйләм, һорау һөйләм. Өндәү һөйләм. Хәбәр һөйләм. О-ө хәрефле һүҙҙәр. Һөйләмдең сиктәрен билдәләү.

III. Орфография һәм пунктуация. Кешенең исем- фамилияларын, хайуан ҡушаматтарын һәм ер-һыу атамаларын ҙур хәреф менән яҙыу. Ярҙамсы һүҙҙәрҙең айырым яҙылыуы.

IV. Универсаль уҡыу эш төрҙәре. Уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнеү. Хәреф һәм өндәрҙе таныу. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе ҡушып уҡыу. Текстарҙы аңлы һәм тасуири уҡыу.
Хәрефтәрҙе айырым һәм бер-береһе менән тоташтырып яҙыу. Һүҙ һәм һөйләмдәрҙе, ҡыҫҡа текстарҙы күсереп яҙыу. Ишеткәнде яҙыу (диктант). Уҡытыусы ҡуйған һорауға тулы һәм асыҡ яуап биреү, дәрестә иғтибар менән тыңлау, уҡытыусы ҡушҡанды аңларға өйрәнеү. Үҙ-ара һөйләшеү (диалог) ҡороу. Тел күренештәрен күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау һәм һығымта яһау. Үҙ аллы белем алырға өйрәнеү. Уҡытыусы ярҙамында маҡсат ҡуйыу. Эште планлаштырыу һәм уның буйынса эшләү. Тикшереү. Эште баһалау

1. Алфавит (1 сәғәт).
Алфавитта хәрефтәр һаны, тәртибе. Алфавиттың тәғәйенлә-неше. Алфавитты ҡулланыу. Алфавит хәрефтәрен дөрөҫ яҙыу.
2. Хәреф һәм өн (3 сәғәт).
Һүҙҙәге һуҙынҡы, тартынҡы өндәрҙең айырмаһын билдәләү һәм улар тураһында ҡыҫҡа мәғлүмәт биреү, һөйләй белеү. Хәреф. Уның функцияһы.
а) Һуҙынҡы өндәр.
Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар таблицаһы.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| * | ә | ө | Ү | э(е) | и |
| ** | а | о | У | ы | — |

Бер һуҙынҡы хәреф менән генә айырылыусы һүҙҙәр төҙөү һәм әйтеп яҙыу: *ай — уй, ҡар — ҡыр, бай — бәй, бил — был, тор — тор, һут — һут, ҡаш — ҡуш, мал — мәл, арыш — алыш, урам —ураҡ, көрәк — кәрәк* һ. б. һүҙҙә бер генә хәрефте алмаштырыу менән мәғәнәнең үҙгәреүе.
Күсереп яҙыу.
б) Тартынҡы өндәр. Тартынҡы хәрефтәр таблицаһы.

| | | | | | | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| □* □** | б | В | Г | ғ | ж | д | ҙ | З | й | р | л | м | н | н | - | — |
| □* □** | п | Ф | к | ҡ | ш | т | Ҫ | с | | | | | | | Х | һ |

Тартынҡы өндәр нәҙек һуҙынҡылар уратылышында. Тартынҡы өндәр ҡалын һуҙынҡылар уратылышында. һүҙҙә бер генә тартынҡы хәрефте алмаштырыу менән мәғәнәнең үҙгәреүе: *бар — пар, Нал — тал, йыл — ҡыл, мул — ҡул, шар — шат, таш — тап, суп — сүл, көр — көс, кусә — күбә, ҡыҙыҡ — ҡыйыҡ, тараҡ — ҡараҡ, йәмле — йәнле, Налам — ҡалам, тырыш — шырыш* һ. б.
Күсереп яҙыу.
3. Ижек. Һүҙҙе ижеккә бүлеү. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү (2 сәғәт). Башҡорт теленең төп законына ярашлы һүҙҙәр йыйыу: һүҙҙен
беренсе ижеге нәҙек булһа, башҡа ижектәре лә нәҙек (нәҙек һүҙ), ә беренсе ижеге ҡалын булһа, башҡа ижектәре лә ҡалын (ҡалын һүҙ). һүҙҙе дөрөҫ күсереп яҙыу.
4. Баш хәреф (4 сәгәт).
Кешенең исем-шәрифтәре. Хайуан ҡушаматтары. Ер-һыу атамалары.
5. о — ө, у — ү хәрефтәре менән һүҙҙәр (2 сәғәт).
о — ө, у — ү хәрефтәре менән һүҙҙәр йыйыу, уларҙы яҙып өйрә-неү. һөйләм күсереп яҙыу.

6. Һүҙҙә [э] өнөн хәрефтәр менән тамгалау (1 сәғәт).
Э хәрефенең һүҙ башында ғына яҙылыуы. [э] өнөнөң һүҙ уртаһында е хәрефе менән тамғаланыуы.
7. Йә, йө, йү, йе (һүҙ уртаһы), но, йы ҡушымсалары менән һүҙҙәр йыйыу, уларҙы яҙып өйрәнеү (2 сәғәт).
Йе ҡушымсаһы һүҙ уртаһында һәм һүҙ аҙағында: *тейеш, бейек, кейек, кейем, мейес, мейе, бейе, әсәйем, өләсәйем, бесәйем.*
8. Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә я, е, ё, ю хәрефтәре (2 сәғәт).
Я, е, ё, ю — рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә тартынҡыларҙы йомшартыу тамғаһы *(кухня, телефон, шахтёр, тюль* һ. б.).
Яя, Юю хәрефтәре ҡалын, Ее хәрефе нәҙек һүҙҙәрҙә яҙылыуы. Её хәрефе рус һүҙҙәрендә яҙыла.
9. һүҙ төркөмдәре (3 сәғәт).
Предметтың атамаһын беддергән һүҙҙәр. Предметтың хәрәкә-тен белдергән һүҙҙәр. Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр.
Ярҙамсы һүҙҙәр: *һәм, менән; ла-лә, да-дә, та-тә; ғына-генә, ҡына-кенә.*
Телмәр үҫтереү. Сюжетлы һүрәттәр буйынса бәләкәс хикәйәләр төҙөү. һөйләмдәр тәртибе боҙоп бирелгән текстың һөйләмдәрен тәртипкә килтереү.
5 — 6 һөйләмдән торған тексты күсереп яҙыу.
10. Һөйләм (3 сәғәт).
һөйләмдең башы, аҙағы. Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре (нөктә, һорау, өндәү).
Һөйләмгә һүҙ өҫтәү, мәғәнәһен киңәйтеү. Һөйләмде күсереп яҙыу ҡағиҙәһен өйрәнеү.

**2-се класс**

. **Графика**. Өн һәм хәреф. Хәреф һәм өн. Ике өндө белдереүсе хәрефтәр: я, е, ё, ю. У, ү хәрефтәренең ике өндө белдереүе. В хәрефенең үҙенсәлеге. һуҙынҡыларҙың һүҙҙәрҙе үҙгәртеүҙәге, яңы һүҙҙәр яһауҙағы һәм үҙҙәренең янында торған тартынҡыларҙың ҡалынлығын йәки нәҙеклеген билдәләүҙәге әһәмиәте. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү, абзац. Башҡорт теле орфографияһының нигеҙҙәре. Һүҙҙәге өндәрҙе тикшереү тәртибе. Һүҙҙең өн моделе.
**Морфология, һүҙ төркөмдәре**. Предмет атамаһын белдереүсе һүҙҙәр. Кем? кемдәр? нимә? нимәләр? һорауына яуап биреүсе һүҙҙәр. Уларҙың белдергән мәғәнәһе, телмәрҙә ҡулланылышы. Кешенең исем-фамилияһын, хайуандарҙың ҡушаматтарын, ер-һыу атамаларын белдереүсе һүҙҙәр, уларҙы баш хәреф менән яҙыу.

**Предметтың хәрәкәтен белдереүсе һүҙҙәр**. Уларҙың белдергән мәғәнәһе. Ни эшләй? ни эшләне? ни эшләр? йәки ни эшләйәсәк? һорауҙарына яуап биреүсе һүҙҙәр. Уларҙың һөйләмдәге әһәмиәте һәм урыны.

**Предмет билдәһен белдереүсе һүҙҙәр**. Уларҙың аңлаткан мәғәнәһе, әһәмиәте. Предмет билдәһен белдереүсе һүҙҙәре булған һүҙбәйләнештәр.

**Ярҙамсы һүҙҙәр**: ***һәм, менән, -да, -дә, -ҙа, -ҙә, -та, тә, -ла, -лә, ғына, гена, псына, кенә.*** Уларҙың айырым яҙылышы, айырым торғанда мәғәнә аңлатмауы, баҫымһыҙ булыуы һәм телмәрҙә ҡулланылышы.

**Һүҙьяһалыш**. Тамырҙаш һүҙҙәрҙе укыу, яҙыу, төркөмләү (термин бирелмәй).

**Синтаксис.**Һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм. Уларҙың оҡшашлығы һәм айырмаһы. Әйтеү маҡсаты буйынса һөйләм интонацияһы һәм төрҙәре. Хәбәр һөйләм. Һорау һөйләм. Өндәү һөйләм. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Эйә, хәбәр, эйәрсән киҫәктәр.

**Орфография һәм пунктуация**. Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен өйрәнеү һәм ғәмәли ҡулланыу. Йә, йө, йү, йе, йо, йы ҡушымсалы һүҙҙәр. Һүҙҙәрҙә ике өндө белдергән я, е, ё, ю хәрефтәре. Һүҙ башында [уы], [үә] өндәре, в хәрефе. Һөйләмдең баш хәреф менән яҙылышы. Кешенең фамилияһы һәм исеменең, хайуан ҡушаматтарының, ер-һыу атамаларының баш хәреф менән яҙылышы. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр аҙағында тыныш билдәләре. Һаналып киткән һүҙҙәр араһында тыныш билдәләре.

**Телмәр үҫтереү**. Аралашыу ситуацияһы. Уға ярашлы һөйләшеү (диалог) төҙөү.Текст. Тексты таныу. Текстың атамаһы. Текстағы һөйләмдәрҙең мәғәнәүи эҙмә-эҙлелеге. Текст төҙөү. Монолог (сығыш яһау, иғлан эшләү, доклад). Аралашыу этикеты (сәләм биреү, хушлашыу, ғәфү үтенеү, һорау менән мөрәжәғәт итеү, рәхмәт белдереү).

**Универсаль укыу эш төрҙәре**. Үҙ аллы белем алыуҙың башланғыс алымдарын өйрәнеү. Уҡыу эшмәкәрлеге буйынса башланғыс күнекмәләр алыу (маҡсат ҡуйыу, уҡыу материалы менән ҡыҙыҡһыныу, эште планлаштырыу, белем алыу буйынса мәсьәләне хәл итеү, эҙләнеү эше, рефлексия, контроль, баһа). Аралашыу мәҙәниәте
Контроль диктанттар -5
Тикшереү эштәре - 8

**3 класс**

1) **Фонетика һәм орфоэпия**. Өндәр һәм хәрефтәр. Һүҙ моделе. Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡылар, һуҙынҡылар таблицаһы. Тартынҡылар. Уларҙың таблицаһы. Яңғырау-һаңғырау тартынҡылар. Талғын (сонор) өндәр. Һүҙҙә сиратлашып килгән тартынҡылар (теләк — теләге, тараҡ - тарағы, китап - китабы). Нәҙек һәм ҡалын әйтелешле һүҙҙәр. Һүҙҙең өн-хәрефенә (фонетик) анализ.
2) **Һүҙ составы (морфемика)**. Һүҙ составы (тамыры һәм ялғауҙары). Тамырҙаш һүҙҙәр. Уларҙың тамыры. Яһаусы (суффикс), үҙгәртеүсе ялғауҙар, һүҙьяһалыш. Ҡушма һүҙҙәр. Ҡушылып яҙылыусы ҡушма һүҙҙәр. Ҡабатлау йәки ишләү юлы менән яһалған ҡушма һүҙҙәр.

3) Уларҙың һыҙыҡса аша яҙылышы. Ҡушма һүҙҙәрҙә нәҙек айырыу һәм ҡалын айырыу билдәләренең яҙылышы, һүҙ составы буйынса анализ.
4) **Орфография һәм пунктуация.** Ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы. Ялғауҙарҙың ҡушылып яҙылыуы. Ялғау ҡушҡанда бер иш ҡуш тартынҡы барлыҡҡа килеүе.

Тамыр һүҙҙәрҙәге **о-ө, ы**-е хәрефтәренең ялғау ҡушҡанда ла һаҡланыуы. **О-ө, ы**-е хәрефтәренең тамыр һүҙҙәрҙә яҙылмау осраҡтары. Нәҙеклек билдәһенә бөткән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың яҙылышы.

Грамоталы күсереп яҙыу. Диктант, өйрәтеү изложениеһы, миниатюр инша.

5) **Синтаксис.** Һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе айырыу. Уларҙың оҡшашлыҡтары һәм айырмалылыҡтары, һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатыу. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен үҙләштереү, һөйләү маҡсатына ҡарап, һөйләмдәрҙе өс төргә айырыу: хәбәр, һорау һәм өндәү һөйләмдәр. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Һөйләмдең тиң киҫәктәре, һөйләмгә синтаксик анализ.

**Морфология.** Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре. Ярҙамсы һүҙҙәр. Предмет атамаһы. Уны һөйләмдә ҡулланыу. Исемдең һорауҙары. Яңғыҙлыҡ исемдәр. Кеше исем-шәрифтәренең, хайуан ҡушаматтарының, ер-һыу атамаларының, китап, газета-журнал исемдәренең ҙур хәрефтән яҙылышы. Мәғлүмәт алыу ысулдары. Күренекле кешеләр тураһында белешмә алыу. Улар тураһында текст төҙөү. Алты-ете балалар яҙыусыларының исем-шәрифтәрен белеү.

**Билдәне белдергән һүҙҙәр.** Уларҙың исем алдынан килеүе. һөйләмдә аныҡлаусы ролен үтәүе.

Хәрәкәтте белдергән һүҙҙәр. Һөйләмдә уларҙы таныу, моделен һыҙыу. Уларҙың һөйләмдә хәбәр ролен үтәүе.

**Ярҙамсы һүҙҙәр.** Уларҙың дөрөҫ яҙылышы.

6) **Лексика.** Һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһе. Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр. Омонимдар, синонимдар, антонимдар. Нығынған һүҙбәйләнештәр менән һөйләмдәр төҙөү.

7) **Телмәр һәм уның төрҙәре.** Һөйләү телмәре. Диалог. Әңгәмәсе менән диалог ҡороу. Аралашыу оҫталығын шымартыу. Монолог. Уны һөйләү оҫталығы. Эске телмәр. Ым-ишара. Уйлау, хыял итеү.

**Хикәйә. Әкиәт. Шиғыр.** Тексты логик яҡтан тамамланған өлөштәргә бүлеү. Уларға исем ҡушыу. Абзац. Ҡыҙыл юл. Бәләкәй күләмле хикәйәләр (текст) ижад итеү. Текстҡа ҡарата 4-5 һөйләмдән торған баһалама яҙыу. Әкиәт. Был жанрға хас үҙенсәлектәр. Әкиәт ижад итеү. Шиғыр төҙөлөшөн өйрәнеү. Шиғыр яҙыу үҙенсәлектәре. Шиғырҙы күсереп яҙыу ҡағиҙәләре.

**Телмәр үҫтереү.** Телмәр мәҙәниәте. Темаға ярашлы тәбиғәт объекттары, күренештәре, ҡыҙыҡлы хәлдәр тураһында, 5-6 һөйләмдән торған мажаралы хикәйә йәки әкиәт төҙөү.

Текстҡа план төҙөү. Тексттың өлөштәре һәм һөйләмдәр араһында мәғәнәүи эҙмә-эҙлеклелек. Тексттың идея-тематик йөкмәткеһе. Тексттың төҙөлөш схемаһы (башы, уртаһы - төп өлөш, аҙағы).

Үҙер йәки коллектив төҙөгән план буйынса хикәйәләү. Бирелгән тексты (50-60 һүҙ) изложение итеп яҙыу. Хикәйә ижад итеү. Инша яҙыу (65-70 һүҙ).

## 4 класс

Дүртенсе класс уҡыусыһы алда үткән барлыҡ белемдәрен дөйөмләштерә һәм билдәле бер эҙмә-эҙлектә шуларға нигеҙләнеп яңыһын өйрәнергә тейеш.Өйрәнелгән орфограммаларға таянып, хатаһыҙ рәүештә күсереп яҙырға, диктант, изложение һәм инша кеүек эштәрҙе

үтәй алырға бурыслы.
һүҙҙе ижектәргә бүлеү, баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәрҙе айыра белеү, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙы дөрөҫ билдәләй алырға, өн һәм хәреф айырмаһын белергә тейеш.
Шулай уҡ һүҙ составын (тамыры һәм ялғауы), һүҙҙең мәғәнә-ләренә ҡарап төрлө төркөмдәргә бүленеүен, һәр төркөмдөң үҙенсәлектәрен уҡыусының аңлы үҙләштереүе мотлаҡ.
Уҡылған әҫәр планын төҙөү, планға ярашлы тексты тулы килеш һәм ҡыҫҡартып һөйләргә өйрәнеү, картинаның йөкмәткеһен һөйләй белеү, шуны дәфтәргә изложение, инша итеп яҙа алыу өйрәтелә.
Уҡыусы башланғыс кластарҙа биография, автобиография, һүрәтләмә, мәҡәлә, инша яҙыу күнекмәләрен дә үҙләштерергә бурыслы.
Экскурсиялар, күҙәтеүҙәр, коллектив эштәр хаҡында бала телдән тасуир итә белергә һәм шуларҙы яҙма рәүештә лә һүрәтләй алырға тейеш.
Дөйөм алғанда, бала программа материалын тулы килеш үҙләштерергә, туған тел матурлығын, күркәмлеген тоя белергә, үҙендә тыуған хис-тойғоларын яҙма рәүештә лә бирә алырға бурыслы. Был программа әле һанап кителгән талаптар, бурыстар нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Тейешле кимәлдә дәресте ойошторғанда, һәр уҡыусы уны, һис шикһеҙ, яҡшы үҙләштерә ала.

**I.Фонетика . Һүҙъяһалыш (11сәғәт).**

Ижек, баҫым, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар, парлы һәм парһыҙ яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар, өн һәм хәреф тураһындағы белемдәрен системаға һалыу. Ҡайһы бер һүҙҙәрҙең үҙенсәлекле әйтелеше (орфоэпия). Күҙгә тулы фонетик анализ.

**II . Һөйләм (6 сәғәт)**

.Һөйләү маҡсаты буйынса һөйләмдәрҙе хәбәр, һорау һәм өндәү һөйләмдәргә айырыу. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Тарҡау һәм йыйнаҡ һөйләмдәр. Һөйләмдең тиң киҫәктәре. Һөйләмгә синтаксик анализ.

**III . Морфология (70 сәғәт)**

.

**Исем (15 сәғ.)**

Исемдең предметты атау функцияһы. Исемдең һорауҙары. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдең һан менән үҙгәреше. Исемдең эйәлек заты менән үҙгәреше. Исемдең килеш менән үҙгәреше. Килеш һорауҙары. Ҡалын һәм нәҙек килеш ялғауҙары. Рус теленән ингән һүҙҙәрҙең килеш менән үҙгәреүе. Исемгә морфологик анализ.

**Алмаш (7 сәғ.)**

Уның төркөмсәләре. Зат алмаштары. Килеш менән үҙгәреше, һорау һәм күрһәтеү алмаштары. Алмашҡа морфологик анализ.

**Сифат (11 сәғ.)**

Тамыр һәм яһалма сифаттар. Сифаттарҙың үҙгәреше. Сифат дәрәжәләре. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифатҡа морфологик анализ.

**Рәүеш (7 сәғ.).**

Рәүештең яһалышы. Рәүеш төркөмсәләре. Рәүеш һәм сифат. Рәүешкә морфологик анализ.

**Ҡылым (21 сәғ)**

Ҡылымдарҙың яһалышы. Тамыр, яһалма, ҡушма ҡылымдар. Ҡылымдарҙың үҙгәреше (заман, зат, һан, барлыҡ-юҡлыҡ). Үткән заман ҡылымдары. Уларҙың зат, һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ, шаһитлы-шаһитһыҙ формалары. Хәҙерге заман ҡылымдары. Уларҙың зат, һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ формалары. Киләсәк заман ҡылымдарының зат, һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ формалары. Киләсәк заман ҡылымдарының төрҙәре (эш- хәрәкәттең үтәлеүенә икеләнеү, мотлаҡ ышандырыу). Ҡылым һөйкәлештәре. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары. Уларҙың зат, һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ формалары. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары. Уларҙың заман, зат, һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ формалары. Шарт һөйкәлеше ҡылымдары. Теләк һөйкәлеше ҡылымдары. Ҡылымға морфологик анализ.

**Һан (8 сәғ)**

Ябай һәм ҡушма һандар. Һан төркөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы, һандарҙың башҡа һүҙҙәр менән оҡшашлығы.

һанға морфологик анализ.

**IV.Лексика (7 сәғ)**

Һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәләре, һүҙҙең күп мәғәнәлелеге. Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр. Омонимдар. Синонимдар. Антонимдар. Нығынған һүҙбәйләнештәр. Уларҙы телмәрҙә ҡулланыу.

**V.Телмәр этикеты (7сәғ)**

**VI. Үтелгәнде ҡабатлау(11сәғ)**

Башҡорт теле һәм Башҡортостан мәҙәниәте һәм тарихы – **18 сәғәттә** бергә ҡушып өйрәнелә.

“Әсә теле”дәреслегендәге күнегеүҙәрҙәге текстар Башҡортостан мәҙәниәте һәм тарыхын ҡушып өйрәнеүгә тура килә

Контроль диктанттар -5

Тикшереү эштәре – 8

## Укыу йылы аҙағына укыусының әҙерлек кимәленә талаптар.

**1 класс**

Уҡыусы

• һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе; нәҙек һәм ҡалын һуҙын-кыларҙы; башҡорт һүҙенең фәҡәт нәҙек йәки ҡалын ижектәрҙән генә тороуын; һүҙҙең өн моделей төҙөй белергә;

• өндө хәрефтәр менән тамғалау, хәрефтәрҙе дөрөҫ яҙыу, уларҙы бер-береһе менән дөрөҫ тоташтырып, һүҙҙәр, бәләкәс кенә һөйләмдәр яҙа белергә;

• һүҙҙе юлдан юлға дөрөҫ күсерә белергә;

• телмәрҙән һүҙҙе, һөйләмде айырып ала белергә;

• һөйләмде баш хәрефтән башлап, аҙағына тейешле (нөктә, өндәү, һорау) тамға ҡуйып яҙа белергә;

• кеше исем, фамилияһын, йорт хайуандарының ҡушаматтарын, ябай ғына яҙылышлы ер-һыу атамаларын баш хәрефтән яҙа белергә;

• һүҙҙәрҙе төркөмдәргә айыра белергә: предмет-һүҙ, хәрәкәт-һүҙ, билдә-һүҙ; ярҙамсы һүҙҙәр;

• бирелгән предмет (объект), күренеш, хәл-ваҡиға тураһында һөйләм төҙөй белергә;

• телдән 3 — 4, 4 — 5 һүҙҙән торған текст төҙөй белергә тейеш.

**2 класс**

**Шәхси үҫеш кимәле**
-телдең һәм телмәрҙең кешеләр тормошондағы әһәмиәтен аңлау;
-тексты эмоциональ ҡабул итеү, үҙеңдең хис-тойғоларың менән бүлешеү;
-кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлау, уртаҡлашыу, бүлешеү;
-башҡа кешеләрҙең яҙма һәм һөйләү телмәренә иғтибар итеү (интонация, темп, тон, һүҙҙәр һәм тыныш билдәләренең ҡулланылышы һ. б.).
Был һөҙөмтәләргә ирешеүҙең сараһы булып дәреслектәге күнегеүҙәр тора.
**Метапредмет кимәле**
Ойоштороу эшмәкәрдеге:
-уҡытыусы ярҙамында эшмәкәрлек маҡсатын билдәләү;
-планлаштырыу;
-һөҙөмтәне һәм белемде үҙләштереү кимәлен күҙаллау;
-дәрестә эш барышын һөйләп аңлатып барыу;
-дәреслек материалы менән эшләү барышында фекер, фараз менән уртаҡлашыу;
-уҡытыусы тәҡдим иткән план буйынса эшләү;
-коллектив төҙөлгән план буйынса эшләү;
-тикшереү;
- төҙәтмәләр индереү;
- баһалау.
**Танып белеү эшмәкәрлеге**:
-дәреслектең, һүҙлектәрҙең, белешмәләрҙең айышына төшөнөү (йөкмәткеһе, шартлы билдәләре);
-дәреслектән, текстан, таблицаларҙан, схемаларҙан, иллюстрацияларҙан һорауға яуап табыу;

-күмәкләп йәки үҙ аллы башҡарған эш буйынса һығымта яһай белеү;
-ҙур булмаған тексттың йөкмәткеһен һөйләү;
-бер төрлө информацияны икенсе төрлө формаға үҙгәртеү.
**Аралашыу эшмәкәрлеге**:
-үҙеңдең фекереңде телдән һәм яҙма рәүештә формалаш- тырыу;
-кешенең телмәрен тыңлау һәм аңлау, телмәрҙең темаһын, тәрәк үҙҙәрен билдәләү;
-тексты тасуири уҡыу һәм йөкмәткеһен һөйләү;
-уҡытыусы һәм класташтар менән берлектә тәртип ҡағиҙәләре һәм уларҙы үтәү, аралашыу тураһында килешеү;
-парлап, төркәмләп эшләргә өйрәнеү, төрлө ролдәр үтәү (башҡарыусы йәки лидер).
**Предмет үҙләштереү кимәле**

-уҡытыусы йәки уҡыусыларҙың һөйләгән тексын ишетеп ҡабул итеү;
-тексты һөйләмдәр теҙмәһенән айыра белеү;
-бөтөн һүҙҙәр менән аңлы, дөрөҫ, тасуири уҡыу;
-текстың исемен (атамаһын) аңлау, тексҡа исем һайлап алыу йәки ҡушыу;
-тексты өлөштәргә бүлеү, һәр бүлеккә исем ҡушыу (план төҙөү);
-ентекле йәки һайланған өлөштөң йөкмәткеһен һөйләү;
- тексты ентекле һөйләй белеү;
-ҡыҫҡа хикәйә төҙөү;
-һүҙҙең өндәрен дөрөҫ атау, һүҙҙе ижеккә бүлеү, өндәр һәм хәрефтәр һанын билдәләү, дөрөҫ баҫым ҡуйыу, баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәрҙе табыу, телдән өн-хәреф анализы яһау;-һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәләрен ҡуйыу;

-баҫма тексты дөрөҫ итеп күсереп яҙыу, яҙылғанды өлгө менән сағыштырып тикшереү;
-һүҙҙәрҙе һәм ҙур булмаған һөйләмдәрҙе, 30-40 һүҙҙән торған тексты диктант итеп яҙыу;
-һүҙҙәрҙең ауыр яҙылышлы урындарын күреү һәм дөрөҫ яҙыу;

-һөйләмде, кешенең исемен һәм фамилияһын, географик атамаларҙы, хайуан ҡушаматтарын баш хәреф менән яҙыу; нәҙеклек (ь) һәм ҡалынлыҡ (ъ) билдәләрен, йә, йө, йү, йе, йо, йы ҡушымсаларын дөрөҫ яҙыу;
- өйрәнелгән ҡағиҙәләргә хаталарҙы табып төҙәтеү;
-тамырҙаш һүҙҙәрҙең тамырын табыу, ялғауҙарҙы айыра белеү һәм билдәләү;
-һүҙҙәргә һорау ҡуйыу; кем? нимә? һорауына яуап биреүсе һүҙҙәрҙе
-күреү, һөйләмдә кем йәки нимә тураһында һүҙ барыуын асыҡлау;
-бирелгән һүҙҙәрҙән йәки тема буйынса һөйләмдәр төҙөү;
-картина йәки бирелгән тема буйынса ҙур булмаған текст төҙөү, уҡытыусы ярҙамында 4-5 һөйләмдән торған тексты дәфтәргә яҙыу.

**3 класс**

**1. Шәхси сифаттарҙы үҫтерергә:**

- үҙ аллы эш итергә, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарарға;
- атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә ҡарата ихтирамлы булырға;
- мәктәп йыһаздарына, уҡыу-әсбаптарына һаҡсыл булырға;
- тыуған илде яратырға; ерҙе, телде һаҡларға;
- һаулыҡты нығытырға;

- ҡунаҡта, кинола йәки экскурсия һәм башҡа йәмәғәт урындарында әҙәпле булырға, файҙалы ял итергә;
- кеше менән аралашыу этикетын үҙләштерергә.

3) **Предмет буйынса белем алырға:**

- һүҙҙең өн моделенә ярашлы һүҙ уйлап табырға;
- һүҙҙең өлөштәрен (тамыр һәм ялғау, яһаусы ялғау һәм яһалма һүҙ) айырырға;
- тамырҙаш һүҙҙәрҙе танырға. Уларҙы башҡа оҡшаш һүҙҙәрҙән айырырға;
- тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәр һәм хәрефтәр, парлы- парһыҙ, яңғырау-һаңғырау, сонор тартынҡы өндәр, сиратлашып килеүсе тартынҡылар тураһында һөйләй белергә;
- һүҙгә фонетик анализ яһай белергә;
- ҡушма һүҙҙәрҙе танырға, уларҙың дөрөҫ яҙылышын аңлата белергә;

- үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе танырға һәм уларға дөрөҫ ялғау ҡуша белергә;

- һүҙ төркөмдәрен (предмет атамаһын, билдәһен, хәрәкәтен белдергән һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙе) таба белергә;
- һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен айыра белергә;
- сюжетлы һүрәт, һорауҙар, терәк һүҙҙәр ярҙамында хикәйә, әкиәт ижад итергә.

4) **Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштерергә:**

- үҙ аллы белем алырға, мәғлүмәт йыйырға һәм уларҙы ҡуллана белергә:
- дәрес барышында уҡытыусы менән берлектә эшләргә; дәрескә маҡсат ҡуйырға һәм уны дәрес һуҙымында күҙ уңында тота белергә һәм тормошҡа ашырырға, эште дөрөҫ планлаштырырға, эҙләнеү эше алып барырға;
- эҙләнеү эше һөҙөмтәләре буйынса презентация эшләргә;
- тиҫтерҙәре һәм оло кешеләр менән итәғәтле һөйләшергә, кеше менән мөнәсәбәт ҡороу оҫталығын үҙләштерергә;
- эшләгән эштәрен дөрөҫ баһаларға һәм кәрәк икән төҙәтмәләр индерергә.

## 4 класс

**Уҡыусы**

- өйрәнелгән орфограммаларҙы эсенә алған 60 — 70 һүҙҙән торған тексты грамоталы яҙа белергә;
- һүҙҙе яһалышы һәм һүҙ төркөмдәре буйынса тикшерә белергә (исемдең һанын, килешен, эйәлек затын; ҡылымдың һанын, заманын һәм затын; сифаттың дәрәжәһен атай белергә);
- 70 — 80 һүҙлек текст буйынса өйрәнеү изложениеһы; тирә-яҡтағы объекттарҙы һүрәтләп, тәбиғәт күренештәрен, хәл-ваҡиға-ларҙы эҙмә-эҙлекле бәйән итеп, хикәйә (текст) төҙөп яҙа белергә;
- мәҙәниәтле аралашыу оҫталығына, телмәр этикетына эйә булырға; аралашҡанда урынлы ваҡытта ғәфү үтенә, рәхмәт әйтә белергә;
- үҙендең фекеренде яҡлағанда, уй-тойғоларынды еткергәндә телмәренде аныҡ, эҙмә-эҙлекле бәйән итеп, тыныс, итәғәтле итеп еткерә белергә; әңгәмәсенең уй-тойғоларын аңлай, уның фекере менән иҫәпләшә һәм уртаҡ фекергә килә **белергә тейеш.**

**Һүҙҙәр запасы. Һүҙлек һүҙҙәре.**

Уҡыусы башланғыс мәктәпте тамамлағансы билдәле кимәлдә башҡорт теленең лексик фразеологик минимумын үҙләштерергә тейеш. Был өлкәлә уҡытыусынан системалы эш талап ителә. Һүҙлек һүҙҙәрен үҙләштереү өҫтөндә уҡыу йылы һуҙымында маҡсатлы эш алып барылырға тейеш.

**Башҡорт теленән календарь - тематик план**

**2 класс**

**Бөтәһе 70 сәғәт**

| № | **Дәрестең темаһы** | **Сәғ. һаны** | **Уҡыусыларҙың эшмәкәрлегенең төп төрҙәре** | **Үтәү ваҡыты** | **Фактик үтәү ваҡыты** | **Иҫкәрмә** |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | **Инеш дәрес** | **1** | | | | |
| 1 | Уҡымышлы булыу ни өсөн кәрәк? | 1 | 2 -се класта уҡыу осорона пландар ҡабул итергә, маҡсатлы йүнәлеш алырға. Уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнергә. | 04.09 | | |
| | **Ҙур хәреф.Һөйләм**. | **13** | | | | |
| 2,3 | Ҙур хәреф.Һөйләм. | 2 | Һөйләмде тейешле интонация менән уҡырға. Уның башында ҙур хәреф, аҙағына тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙырға. Күсереп яҙыу ҡағиҙәләрен үтәргә. | 04.09<br>07.09 | | |
| 4 | Һөйләм. Һүҙбәйләнеш | 1 | | 09.09 | | |
| 5 | Контроль (ҡырҡым) диктант “Көҙ” | 1 | Кеше исемдәренең мәғәнәһә тураһында мәғлүмәт алыу өсөн төрлө сығанаҡтар ҡулланырҡа. Кеше исемдәрен дөрөҫ яҙырға. | 11.09<br>16.09 | | |
| 6-7 | Кеше исемдәре нисек яҙыла? | 2 | Уҡыусыларҙың белемен тикшереү. | 14.09 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8-10 | Ҙур хәреф. Кеше фамилиялары. | 3 | Кеше исем-фамилияларын дөрөҫ яҙырға. һөйләмдә орфограммалар аҫтына һыҙырға. Уларҙы аңлатырға. Һөйләмде дөрөҫ күсереп яҙырға | 18.09<br>21.09<br>23.09 | | |
| 11-12 | Ҙур хәреф. Ер-һыу атамалары. | 2 | Тыуып үҫкән ер-һыу атамалары тураһында мәғлүмәт алырға. Ауыл, ҡала, йылға, күл, тау атамаларын ҙур хәрефтән яҙырға. | 25.09<br>28.09 | | |
| 13-<br>14 | Ҙур хәреф. Хайуан ҡушаматтары.<br>Контроль диктант | 1 | Ҡушамат хайуанға нимәгә нигеҙләнеп ҡушылыуын аңлатырға. Уларҙы ҙур хәрефтән яҙырға. | 30.09<br>02.10 | | |
| 15 | Ҙур хәреф. Хайуан ҡушаматтары. | 1 | Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе ҙур хәрефтән яҙырға. Һөйләм, тексты дөрөҫ күсереп яҙырға. Диктант тексын иғтибарлы тыңларға. яҙырға. | 05.10 | | |
| | **Аралашыу этикеты** | **13** | | | | |
| 16 | Үҙ-ара һөйләшеү. Диалог. | 1 | Үҙ-ара аралашыу оҫталығына өйрәнергә. | 07.10 | | |
| 17 | Үҙ-ара һөйләшеү ҡороу. Диалог. | 1 | Кеше менән танышҡанда мотлаҡ әйтелә торған һүҙҙәрҙе яғымлы итеп әйтергә, аралашыу мәҙәниәтенә өйрәнергә. | 09.10<br>12.10 | | |
| 18 | Йәмғиәт урынында осрашыу. Диалог. | 1 | Таныш булмаған кешегә тәү башлап һүҙ ҡушырға, аралашырға күнегергә. | 14.10<br>16.10 | | |
| 19- | Яҡын кешеләрҙе ҡотлау, тәбрикләү. | 1 | Яҡын кешеләрҙең тыуған көндәрен ҡағыҙға теркәп ҡуйырға, ул көндө уларҙы ҡотларға. | 19.10<br>21.10 | | |
| 20-21 | Әкиәт геройҙары. Минең | 2 | Өндәшеү маҡсатына, урынына ҡарап тауышты тейешлесә көйләргә өйрәнергә. | 23.10 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | тиҫтерҙәрем. Аралашыу этикеты. | | | 06.11<br>09.11 | | |
| 22 | Мәғлүмәт, белешмә эҙләү. | 1 | Йәмғиәт урындарында ашығыс белешмә кәрәк булғанда фекеренде ҡыҫҡа итеп аңлата белергә. | 11.11<br>13.11 | | |
| 23 | Һамаҡ.Әйтеш.Һанамыш | 1 | Һамаҡ, һынамыш, мәҡәл-әйтемдәрҙе яттан белергә.Телмәр ситуацияларында мәҡәл-әйтемдәрҙе урынлы ҡуллана белергә. | 18.11 | | |
| 24 | Һынамыш. Һанамыш (һанашмаҡ) | 1 | | 20.11 | | |
| 25 | Мәҡәлдәр, әйтемдәр | 1 | | 23.11 | | |
| 26-27 | Иғлан. Белдереү. | 2 | Иғлан, белдереү йөкмәткеһен ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп төҙөргә, уны матбуғат биттәрендә баҫтырыуҙы планлаштырырға | 25.11<br>27.11 | | |
| 28 | Тикшереү эше. Иғлан, белдереү. | 1 | Актуаль темаларға ике кеше араһында һөйләшеү өлгөһө ижад итергә. | 30.11 | | |
| | **Һөйләм. Текст** | **12** | | | | |
| 29-30 | Һөйләм. | 2 | Һөйләмде тейешле интонация менән уkырға, уның мәғәнәһенә төшөнөргә. Һөйләм төҙөргә.Уны ҙур хәрефтән башларға, аҙағында тейешле тыныш билдәһе ҡуйырға | 04.12<br>07.12 | | |
| 31-32 | Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә, хәбәр | 2 | Һөйләмдән баш киҫәктәрҙе табырға, аҫтарына һыҙырға | 09.12<br>11.12<br>14.12 | | |
| 33 | Һүрәт буйынса өйрәтеү иншаһы."Торналы күл" | 1 | Һүрәткә ярашлы бирелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып, сюжет йөкмәткеһен бирергә | 16.12 | | |
| 34 | Хәбәр һөйләм | 1 | Хәбәр һөйләм аҙағында нөктә ҡуйырға. Уны дөрөҫ күсереп | 18.12 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | яҙырға. | | | |
| 35 | Контроль диктант | 1 | Өндәү һөйләмде тейешле интонация менән уҡырға.Хәбәр һөйләм аҙағына нөктә, өндәү һөйләм аҙағына өндәү тамғаһы ҡуя белергә. | 23.12 | | |
| 36 | Хаталар өҫтөндә эш. Өндәү һөйләм | 1 | | 25.12 | | |
| 37 | Һорау һөйләм. | 1 | Һорау һөйләмде тейешле интонация менән уҡырға, һорау бирергә. Текст йөкмәткеһе буйынса һорауҙар төҙөргә. | 28.12 | | |
| 38 | Һорау һөйләм | 1 | | 30.12 | | |
| 39-40 | Текст. Һөйләм | 2 | 2 -3,3-4һөйләмдән торған текст төҙөй белергә. Тексты күсереп яҙыу ҡағиҙәләренә ярашлы күсереп яҙырға. | 15.01<br>18.01<br>20.01 | | |
| | **Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы.** | **4** | | | | |
| 41 | Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы. | 1 | 4-5, 5-6хәрефтән торған һүҙҙәрҙеәйтеп яҙырға. Һүҙҙеюлдан юлға күсереү өсөн ижеккә дөрөҫ бүлеү | 25.01 | | |
| 42 | Ҡалын һәм нәҙек әйтелешле һүҙҙәр | 1 | Һүҙҙәрҙе күҙәтергә, сағыштырырға.Ҡағиҙә төҙөргә. | 27.01<br>29.01<br>01.02 | | |
| 43 | Һүрәт буйынса инша."Елдерәләр саналар" | 1 | Бирелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып, һүрәт буйынса хикәйә төҙөргә. | 03.02<br>05.02 | | |
| 44 | Һүҙҙе юлдан юлға күсереү | 1 | Һүҙҙе ижеккә бүлеү ысулдарын үҙләштерергә. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү оҫталығы булдырырға | 08.02<br>10.02 | | |
| | **У-ү хәрефе** | **3** | | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 45-46 | У-ү хәрефе | 2 | У-ү хәрефле һүҙҙәрҙе күҙәтергә, сағыштырырға, дөрөҫ яҙырға. | 12.02<br>15.02<br>17.02 | | |
| 47 | Һүрәт буйынса өйрәтеү иншаһы."Шарла уыҡ янында" | 1 | Инша яҙырға өйрәнергә. | 19.02 | | |
| | **О-ө хәрефе** | **1** | | | | |
| 48 | О-ө хәрефле һүҙҙәр | 1 | Тексты аңлап укырға, төп<br>фекерҙе билдәләргә. Текстың йөкмәткеһен эҙмә- эҙлекле һөйләргә, план төҙөргә, дәфтәргә яҙырға | 22.02 | | |
| | **Э өн- хәрефе** | **3** | | | | |
| 49-50 | Ээ хәрефле һүҙҙәр | 2 | Ээ хәрефле һүҙҙәрҙе<br>күҙәтергә, сағыштырырға, һығымта яһарға. Ээ хәрефле һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға. | 24.02<br>26.02 | | |
| 51 | (э) өнө һүҙ уртаһында һәм аҙағында | 1 | Һүҙҙең өн моделен төҙөргә. Уны күҙәтергә, һығымта яһарға,(э) өнө һүҙ уртаһында һәм аҙағында килгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға. | 01.03 | | |
| | **Ы хәрефе** | **2** | | | | |
| 52-53 | Ыы хәрефле һүҙҙәр | 2 | Һүҙ байлығын арттырырға. Ыы хәрефле һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға.Бәйләнешле телмәр үҫтерергә. | 03.03<br>05.03 | | |
| | **Йй хәрефле һүҙҙәр.** | **6** | | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | **Уларҙың яҙылышы.** | | | | | |
| 54-55 | Йй хәрефле һүҙҙәр. Уларҙың яҙылышы. | 2 | Һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға. | 10.03<br><br>12.03 | | |
| 56<br><br>57-58 | Контроль диктант<br><br>Йй хәрефле һүҙҙәр. Уларҙың яҙылышы. | 1<br><br>2 | Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен үтәргә | 17.03<br><br>19.03<br><br>22.03 | | |
| 59 | Күсереп яҙыу | 1 | Эште грамоталы яҙырға | 24.03 | | |
| | **Ике өндө белдереүсе хәрефтәр** | **4** | | | | |
| 60 | Хаталар өҫтөндә эш. (йа) өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? | 1 | Я хәрефле һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға. | 26.03 | | |
| 61 | (йу) өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? | 1 | Юю хәрефле һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға. | 07.04<br><br>09.04 | | |
| 62 | (йэ) өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? | 1 | Ее хәрефле һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға. | 12.04<br><br>14.04 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 63 | (йо) өнө ниндәй хәреф менән тамғалана? | 1 | Ёё хәрефле һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға. | 16.04 | | |
| | **Вв(Уу-Үү) хәрефтәре** | **1** | | | | |
| 64 | Вв(Уу-Үү) хәрефтәре | | Һүҙҙәрҙе күҙәтергә, сағыштырырға, һығымта яһарға. Текстағы һүҙҙәрҙеаңлатҡан мәғәнәһе буйынса төркөмләй белергә | 21.04 | | |
| | **Һүҙ төркөмдәре** | **3** | | | | |
| 65 | Предмет атамаһын<br><br>белдергән һүҙҙәр | 1 | Предметтарҙы күҙәтергә, тасуирлап һөйләргә. Предмет атамаһын белдергән һүҙҙәрҙе һөйләм схемаһында тейешле тамғалар менән билдәләргә | 23.04<br><br>26.04 | | |
| 66 | Предмет хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр | 1 | Предметтың башҡарған эшен атарға. Предмет хәрәкәтен белдергән һүҙгә һорау ҡуя белергә. Предмет атамаһына ярашлы уның хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр уйлап әйтергә, яҙырға | 28.04<br><br>30.04 | | |
| 67 | Предмет билдәһен белдергән һүҙҙәр | 1 | Предметҡа ярашлы билдәне атарға. Һүҙбәйләнеш төҙөп яҙырға. Һөйләмдә билдә- һүҙҙәрҙе айырырға. Уларға һорау ҡуйырға. | 03.05<br><br>05.05 | | |
| | **Һөйләмдең тиң киҫәктәре** | **3** | | | | |
| 68 | Һөйләмдең тиң киҫәктәре | 1 | Һөйләмдә һаналып киткән билдә-һүҙҙәр араһында өтөр ҡуйырға. Һөйләмдең баш киҫәктәрен, эйәрсән киҫәктәрен тамғалай белергә | 07.05<br><br>10.05 | | |
| 69 | Контроль диктант | 1 | | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 70 | Хаталар өҫтөндә эш. Һөйләмдең тиң киҫәктәре | 1 | | | | |

## Башҡорт теленән календарь – тематик план

## 4 класс

| № | Дәрес темаһы (башҡорт теле һәм Башҡортостан мәҙәниәте) | Сәғ. һаны | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлегенең төп төрҙәре | Үтәү ваҡыты | Фактик үтәү ваҡыты | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | **Фонетика. Һүҙъяһалыш(11сәғ)** Яңы уҡыу йылы менән! Йәйге каникул хәтирәләре | 1 | Һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу һәм һөйләү. Йәйге каникулдар тураһында диалог ҡороу, фекер алышыу | | | |
| 2 | Т/ү. Инша. «Һаумы, мәктәп!» | 1 | Йәйге каникул хәтирәләре менән уртаклашыу. Һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙыу. | | | |
| 3 | Фонетика. Өн һәм хәреф. | 1 | Өндәрҙе һәм хәрефтәрҙе сағыштырыу. Фонетик анализ яһау. | | | |
| 4 | Һүҙҙәргә фонетик анализ | 1 | Һүҙҙәргә тулы фонетик анализ яһау тәртибен үҙләштереү. | | | |
| 5 | ***Контроль ҡырҡым диктант “ Көҙ етте»*** | 1 | Уҡыусыларҙың белемдәрен тикшереү | | | |
| 6 | Хаталар өҫтөндә эш | 1 | Хаталар өҫтөндә эш | | | |
| 7 | Һүҙҙәрҙә я, е, ё, ю хәрефтәре | 1 | Ике өндө белдергән хәрефтәре булған һүҙҙәрҙе күҙәтеү, сағыштырыу һәм дөрөҫ яҙыу. Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын аңлата белеү. | | | |
| 8 | Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Шәжәрәңде бел.**(Башк.мәҙ)** | 1 | Ҡағиҙәләрҙе файҙаланып, ҡушма һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыу. Ҡушма һүҙҙәр яһау. Шәжәрә тураһында һөйләшеү | | | |
| 9 | Ҡуш тартынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы. | 1 | Ҡуш тартынҡылы һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыу күнекмәһе алыу. рус һәм башҡа телдәрҙән ингән ҡуш тартынҡылы һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылы шын үҙләштереү. Уларға үҙгәртеүсе ялғауҙар ҡушыу. | | | |
| 10 | Ярҙамсы һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы. | 1 | Ярҙамсы һүҙҙәрҙе таныу һәм ялғауҙар менән сағыштырыу. Һүҙҙең ялғауына баҫым төшөүен һәм ҡушылып яҙылыуын, ә ярҙамсы һүҙгә баҫым төшмәүен сағыштырыу | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | . | | | |
| 11 | Тикшереү эше.Фонетика. | 1 | Өйрәнелгән ҡағиҙәләрҙе үҙләштереү һәм ҡуллана белеү кимәлен тикшереү. | | | |
| 12 | **Һөйләм( 6сәғ).** Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. | 1 | Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен таба белеү. Һөйләмдең нигеҙен билдәләү. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен һыҙмала күрһәтеү. | | | |
| 13 | Йыйнаҡ һәм таркау һөйләмдәр | 1 | Ике баш киҫәге лә булған һөйләмдәрҙе синтаксик яҡтан тикшереү, таныш моделдәр нигеҙендә йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр төҙөү | | | |
| 14 | Һөйләмдең тиң киҫәктәре. | 1 | Тиң киҫәктәрҙе һанау интонацияһы менән укыу. Һөйләмдең тиң киҫәктәр араһына өтөр ҡуйып яҙыу. Һөйләмдә тиң киҫәктәрҙе билдәләү. | | | |
| 15 | Һөйләмгә синтаксик анализ. | 1 | Иншаның планын төҙөү. Күҙәтеүҙәргә нигеҙләнеп, текст төҙөү һәм уны дәфтәргә яҙыу. | | | |
| 16 | Контроль диктант | 1 | Белемдәрҙе тәрәнәйтеү, синтаксик анализ эшләү. | | | |
| 17 | Хаталар өҫтөндә эш | 1 | Белем кимәлен баһалау. | | | |
| 18 | **Морфология. Исем(15сәғ)** Исем.Башҡортостан үҫемлектәре | 1 | Морфологияның нимә өйрәнеүен үҙләштереү. Исемде белдергән һүҙҙәрҙе күҙәтеү, сағыштырыу һәм уның үҙенсәлектәрен билдәләү | | | |
| 19 | Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр | 1 | Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе күҙәтеү, сағыштырыу, һығымта яһау, уларҙы дөрөҫ яҙыу. | | | |
| 20 | Исемдең һан менән үҙгәреүе. | 1 | Исемдәрҙең берлек һәм күплек формаларын үҙләштереү. Төркөмдәрҙә килешеп эшләү | | | |
| 21 | Исемдең эйәлек заты менән үҙгәреүе. | 1 | Исемдәрҙең эйәлек заты менән үҙгәрешен үҙләштереү, ялғауҙар яҙылышын сағыштырыу, һығымта яһау | | | |
| 22 | Исемдең килеш менән үҙгәреүе. | 1 | Исемдәрҙең төрлө ялғауҙар ҡабул итеүен күҙәтеү нигеҙендә килештәрҙе, уларҙың һорауҙарын ғәмәли үҙләштереү. Исемдәрҙе килеш менән үҙгәртеү. Төркөмдәрҙә һәм үҙ аллы эшләү. | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 | Исемдәрҙә ҡалын һәм нәҙек ялғауҙар. | 1 | Нәҙек һәм ҡалын килеш ялғауҙарын сағыштырыу, уларҙы дөрөҫ яҙыу | | | |
| 24 | Исемдәрҙә ҡалын һәм нәҙек ялғауҙар. | 1 | | | | |
| 25 | ***Контроль күсереп яҙыу*** | 1 | | | | |
| 26 | Хаталар өҫтөндә эш. Рус теленән ингән исемдәрҙә ялғауҙар яҙылышы | 1 | Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең төп законға буйһонмауын күҙәтеү, ялғауҙарҙы дөрөҫ яҙыу, тикшереү һәм һығымта яһау.. | | | |
| 27 | Исемгә морфологик анализ.Халыҡтар дуҫлығы**.** | 1 | «Исем» темаһы буйынса белемдәрҙе системаға һалыу, һығымта яһау. Белем кимәлен баһалау.<br>«Исем» темаһы буйынса белемдәрҙе системаға һалыу, һығымта яһау.<br>Белем кимәлен баһалау. | | | |
| 28 | Т/ү. Һүрәт буйынса инша. «Ҡыш». | 1 | Текст, китап менән эш итеү алым- дарына өйрәнеү, кәрәкле материал туплау. Инша яҙырға өҙерлөнеү маҡсатында текстарға анализ яһау.    Бәйләнешле текст төҙөү. Уны хатаһыҙ яҙыу. | | | |
| 29 | Йомғаҡлау. Исем | | | | | |
| 30 | **Алмаш ( 6 сәғ)**<br><br>Нимә ул алмаш? | 1 | Алмаштарҙың зат һәм предметтарҙы атамайынса, уларҙың исемен алмаштырыуын  күҙәтеү. Уларҙы ниндәй һүҙ төркөмөн алмаштырыуын  билдәләү . | | | |
| 31 | Зат алмаштары. Эйәлек заты ал-маштары | 1 | Телмәрҙә зат һәм эйәлек заты алмаштарының ҡулланылыуын күҙәтеү. Алмаштарҙы килеш менән үҙгәртеү, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. | | | |
| 32 | Һорау һәм күрһәтеү алмаштары. | 1 | Һорау һәм күрһәтеү алмаштарын сағыштырыу, анализлау, һөйләмдәге ролен билдәләү. | | | |
| 33 | Телмәрҙә алмаштарҙы табыу.Килеш менән үҙгәртеү.Ватан **(Башк.мәҙ)** | 1 | Текста алмаштарҙы исем менән алмаштырыу һәм сағыштырыу. Текста алмаштарҙы табыу, уларҙың килештәрен, һөйләмдәге ролен билдәләү. Анализ яһау. | | | |
| 34 | Т/ү. Изложение. «Ҡышҡы уйындар». | 1 | Сәләмәт тормош алып барыу тураһында әңгәмәләшеү | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 35 | Алмашҡа морфологик анализ. | 1 | Алмаштарға бирелгән өлгө буйынса морфологик анализ яһау. Телмәр | | | |
| 36 | **Сифат (9сәғ)**<br><br>Нимә ул сифат? | 1 | Сифаттарҙың телмәрҙәге әһәмиәтен асыҡлау | | | |
| 37 | Тамыр һәм яһалма сифаттар. | 1 | Тамыр һәм яһалма сифаттарҙың яһалышын күҙәтеү, сағыштырыу, , һүҙҙәргә антонимдар һәм синонимдар табыу, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. | | | |
| 38 | Сифат дәрәжәләре. Мәктәп байрамдары **(Башҡ.мәҙ.)** | 1 | Сифат дәрәжәләре тураһында белешмә алыу. Сифаттарҙы төрлө дәрәжәгә ҡуйыу. Уларҙың яһалыу ысулдарын өйрәнеү һәм телмәрҙә ҡулланыу. | | | |
| 39 | Төп һәм шартлы сифаттар. | 1 | Төп һәм шартлы сифаттарҙы сағыштырыу һәм айырырға өйрәнеү. Уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. | | | |
| 40 | Ҡабатлау.Сифат дәрәжәләре | 1 | Сифаттарға морфологик анализ яһау. Үҙ эшеңде тикшереү, баһалау. | | | |
| 41 | Сифаттың һөйләмдәге роле. | 1 | Һөйләмдә сифаттарҙы табыу һәм ролен билдәләү, график тамғалау. | | | |
| 42 | Сифатҡа морфологик анализ.Урал тауы. **(Башҡ.мәҙ.)** | 1 | Бирелгән өлгө буйынса сифатҡа морфологик анализ яһарға өйрәнеү. Телмәр үҫтереү өҫтөндә эшләү. Сифаттар ҡулланып һүрәтләү текстары төҙөү. | | | |
| 43 | ***Контроль диктант "Андыҙ"*** | 1 | | | | |
| 44 | Хаталар өҫтөндә эш Ҡабатлау | 1 | | | | |
| 45 | **Рәүеш (5сәғ)**<br>Рәүеш.Уның яһалыш. Башҡортостан йылғалары **(Башҡ.мәҙ)** | 1 | Рәүеш тураһында төшөнсә алыу, уның билдәләрен күҙәтеүҙәр, сағыштырыу нигеҙендә асыҡлау һәм һығымта яһау. Уға бәйләнеп килгән һүҙҙәрҙе' асыҡлау. һорау ҡуйыу. | | | |
| 46 | Рәүеш төркөмсәләре. | 1 | Рәүештәрҙең төркөмсәләрен сағыштырыу нигеҙендә ғәмәли өйрәнеү, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. | | | |
| 47 | Рәүеште сифат менән сағыштырыу. | 1 | Рәүеш һәм сифаттарҙың айырмалы яҡтарын ғәмәли үҙләштереү. Бер үк һүҙҙең рәүеш тә, сифат та булып килә | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | алыуын күҙәтеү һәм уларҙың ниндәй һүҙ төркөмө булыуын һорауҙар ярҙамында айырырға өйрәнеү. | | | |
| 48 | Т/ү. «Яңы йыл» картинаһы буйынса инша. Класс байрамдары.**(Башҡ. мәҙ)** | 1 | Картинаның йөкмәткеһен үҙләштереү. Картина, терәк һүҙҙәр һәм уҡыусыларҙың тормош тәжрибәһенә таянып ентекле һүрәтләү-хикәйәләү тибындағы текст төҙөү. | | | |
| 49 | Рәүешкә морфологик анализ. | 1 | Бирелгән өлгө буйынса рәүештәргә морфологик анализ яһарға өйрәнеү. | | | |
| 50 | **Ҡылым(10сәғ)** Ҡылым. Башҡорт аштары **(Башк.мәҙ)** | 1 | Ҡылым тураһында төшөнсә алыу, һорауҙары һәм белдергән мәғәнәһе тураһында һығымта яһау, ҡағиҙә төҙөү. Текстан ҡылымдарҙы табыу, асыҡлау. Ҡылымдарҙы яһалышы яғынан сағыштырыу, анализлау, өс төргә бүлеү. Башҡортостан ҡомартҡылары тураһында фекер алышыу. | | | |
| 51 | Ҡылымдарҙың яһалышы . | 1 | | | | |
| 52 | Ҡылымдарҙың заман менән үҙгәреше. | 1 | Телмәрҙә ҡылымдарҙың заман төрҙәрен айырырға өйрәнеү, уларҙы урынлы ҡулланыу. | | | |
| 53 | Үткән заман ҡылымдары. | 1 | Ҡылымдың үткән заманы тураһында белешмә алыу, белдергән мәғәнәһен асыҡлау. Уларҙың ике формаһын (шаһитлы һәм шаһитһыҙ) сағыштырыу, айырмаһын билдәләү. Ҡылымдарҙың үҙгәрешен ғәмәли үҙләштереү. Тест ярҙамында белемдәрҙе тикшереү һәм баһалау. | | | |
| 54 | Хәҙерге заман ҡылымдарының үҙгәреше. | 1 | Хәҙерге заман ҡылымдарының һан, зат менән үҙгәреүен, барлыҡ-юҡлыҡ формаһында ҡулланылыуын өйрәнеү. Мәғлүмәттәрҙе график һыҙма (презентация) ярҙамында күрһәтеү буйынса йомғаҡ яһау. | | | |
| 55 | Киләсәк заман ҡылымдарының ике төрө. | 1 | Киләсәк заман ҡылымдарының ике төрлө яһалышын өйрәнеү, айыра белеү. Уларҙы телмәрҙә урынлы ҡулланыу. | | | |
| | | | | | | |
| 56 | Ҡылым | 1 | Ҡылым һөйкәлештәрен | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | һөйкәлештәре. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары. | | сағыштырыу, айырмаларын һәм оҡшаш яҡтарын билдәләү, һығымта яһау. Бой -ҡ һөйкәлешенең барлыҡ-юҡлыҡ формаһында ҡулланылыуын күҙәтеү. аналяһау. | | | |
| 57 | Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары. | 1 | Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының зат һәм һан менән үҙгәреүен, барлыҡ-юҡлыҡ формаһында ҡулланылыуын күҙәтеү һәм һығымта яһау. | | | |
| 58 | Шарт һөйкәлеше ҡылымдары. | 1 | Теләк һөйкәлеше ҡылымдарының белдергән мәғәнәләрен, һорауҙарын асыҡлау. Башҡа һөйкәлештәр менән сағыштырыу,өйрәнеү. | | | |
| 59 | ***Контроль диктант “Шәжәрә”*** | 1 | Орфограммаларҙы ҡулланып, хатаһыҙ диктант яҙыу | | | |
| 60 | **Һан (4сәғ)**<br>Нимә ул һан? Һан төркөмсәләре | 1 | Һан тураһында төшөнсә алыу, һорауҙары һәм белдергән мәғәнәһе тураһында һығымта яһау, ҡағиҙә төҙөү. Текстан һандарҙы табыу.<br>асыҡлау | | | |
| 61 | Һан төркөмсәләре Башҡортостан символдары. **(Башҡ.мәҙ.)** | 1 | | | | |
| 62 | Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы | 1 | Һандарҙың грамматик билдәләрен ҡабатлау. Текстан һандарҙы табыу һәм уларға морфологик<br>анализ яһау | | | |
| 63 | Һанға морфологик анализ | 1 | һандарҙы табыу һәм уларға морфологик<br>анализ яһау | | | |
| 64 | **Лексика (7сәғ)**<br>Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге.<br>Һүҙҙәрҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе. | 1 | Һүҙҙәрҙең төрлө мәғәнәгә әйә булыуын күҙәтеү. Аңлатмалы һүҙлектәр менән эшләү. Күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланырға өйрәнеү. | | | |
| 65 | Омонимдар. | 1 | Бер үк яҙылышлы, ләкин төрлө мәғәнә аңлатҡан һүҙҙәрҙе айырыу, уларҙы һүҙлектән табыу, мәғәнәһен аңлатыу. | | | |
| 66 | Синонимдар. | 1 | Синонимдарҙы һүҙлектән табырға өйрәнеү. Уларҙын әһәмиәтен аңлатыу. Синоним һүҙҙәр туплау. | | | |
| 67 | ***Йомғаҡлау контроль диктанты “Май*** | 1 | 4 класта өйрәнгәнде тикшереү эшен башҡарғанда ҡулланыу, һығымта яһау. | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | ***тәбиғәте”*** | | | | | |
| 68 | Хаталар  өҫтөндә эш Әхмәтзәки Вәлиди **(Башк.мәҙ)** | 1 | | | | |
| 69 | Йомғаҡлау.Һүҙ төркөмдәре | 1 | Һүҙ төркөмдәренең грамматик билдәләрен ҡабатлау,. | | | |
| 70 | Контроль тикшереү | 1 | 4  класта өйрәнгәнде тикшереү | | | |
| | | | | | | |

**Уҡыусыларҙың  белемдәрен баһалау нормалары**

Диктант текстары, тикшереү эштәре өсөн 2-се класта 30-35 минут , 3-сө класта 40-45 минут ваҡыт бирелә. Диктант текстары һәм тестар Сынбулатова Ф.Ш. Нурыева Р.Ф. авторлығындағы "1-4-се кластар өсөн диктанттар йыйынтығы һәм тикшереү эштәре» башҡорт теле уҡытыусылары өсөн ҡулланманан алына.

**Диктант**

**"5"** – хатаһы юҡ, төҙәтеүһеҙ; эш таҙа һәм каллиграфияға ярашлы;

**"4"** – 2 орфогр. хата; эш таҙа,тик каллиграфия нормаларынан ситкә тайпылышлы;

**"3"** – 3 – 5 хата, эш бысраҡ эшләнһә;

**"2"** – 6 орфогр.хата, эш бысраҡ эшләнһә;

**Контроль диктантты баһалау**

1. Диктанттың күләме 1 минутҡа уҡыған һүҙҙәр нормаһына тигеҙ;
2. Ябай хаталар:ҡаҡиҙәнән ситкә тайпылыу; бер үк хәрефте ҡабатлау; һүҙҙе ижеккә бүлеү; һүҙ аҙағында хәреф төшөп ҡалыу;
3. Бер төрҙәге хаталар:бер төрлө 3 хата 1 хатаға иҫәпләнә, ҡалғандарының һәр береһе айырым хатаға иҫәпләнә;
4. Өс төҙәтеү 1 хатаға иҫәпләнә;

**"5"** - хатаһы юҡ, төҙәтеүһеҙ, эш таҙа һәм каллиграфияға ярашлы (бер график характерҙағы хата).

**" 4"** -- 2 орфогр. һәм 2 пунктуац. хата,йәки 1 орфогр.һәм 3 пунктуац. хата.

**" 3"** -- 3 - 4 орфогр.һәм 4 пунктуац.хата,йәки 5 орфогр. хата.

" 2" -- 5 - 8 орфогр.хата.

**Грамматик эште баһалау**

**"5"** – бөтә эш дөрөҫ;

**"4"** – эштең 3/4 дөрөҫ;

**"3"** – эштең 1/2 дөрөҫ;

**"2"** – эштеҫ яртыһы дөрөҫ түгел;

**Һүҙлек эше**

**"5"** – хатаһы юҡ;

**“4”** – 1 - 2 хата;

**“3”** – 3 - 4 хата (әгәр15-20 һүҙ булһа);

**“2”** – 5 - 7 хата;

**Һүҙлек диктанты өсөн һүҙҙәр һаны**

1 класс –7-8 һүҙ

2 класс –10-12 һүҙ

3 класс –12-15 һүҙ

4 класс –20 һүҙ

**Контроль күсереп яҙыу**

**“5”** – хатаһы юҡ;

**“4”** – 1-2 хата йәки 1 хата 1 төҙәтеү (2 – 4 кл.);

**“3”** – 2 хата һәм 1 төҙәтеү (2 – 4 кл.);

**“2”** – 3 хата(2 – 4 кл.);

**Грамматик биремдәрҙе баһалағанда** түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:

**«5» билдәһе** бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,

**«4» билдәһе** эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

**«3» билдәһе** яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,

**«2» билдәһе** бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

**Тест эштәрен баһалау.**

**«5» билдәһе**- 80%-100%

**«4» билдәһе**- 60% -80%

**«3» билдәһе** – 40% -60%

**«2» билдәһе** – 40% -тан әҙерәк

**Иншаларҙы һәм изложениеларҙы баһалау**

Инша һәм изложениелар яҙҙырыу аша уҡыусыларҙың теманы аса белеүе, тел сараларын инша йәки изложениеның темаһына һәм уларҙағы төп фекерҙе аңлатыу бурыстарына ярашлы айлай белеүе, яҙғанда,грамматик нормаларға һәм дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренә таянып эш итеүе тикшерелә. Шуның өсөн иншаға ла,изложениеға ла һәр ваҡыт ике билдә

ҡуйыла.Беренсе билдә менән – уларҙың йөкмәткеһе һәм телмәр төҙөлөшө, икенсе билдә менән грамоталылыҡ кимәле баһалана